**Рәцеф ШАҺИЕВ**

# Мәңге халыҡ хәтерендә

(Муса Мортазин көндәлек матбуғатта һәм әҙәбиәттә)



Муса Лут улы Мортазин

*Башҡорт халҡының легендар шәхесе, Граждандар һуғышы геройы, өс тапҡыр Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, дәүләт эшмәкәре, ялҡынлы патриот, үткер ҡәләмле публицист, яҙыусы, тарихсы Муса Лут улы Мортазиндың ил күңелендә тотҡан роле, абруйы үҙ тыуған иленә, халҡына кире ҡайтарылды.*

*Арҙаҡлы шәхесебеҙ хаҡында романдар, повестар, поэмалар, одалар, очерк, һүрәтләмәләр яҙылды, йырҙар ижад ителде. Геройҙың исемен бөгөн хужалыҡтар, ойошмалар, урамдар йөрөтә, 100 йыллыҡ юбилейында тыуған ауылы Күсөктә (Маяҡ) йорт-музейы асылды, район хакимиәтенең премияһы булдырылған. Уның яҡты һәм ҡаһарман образы уҡыусыға бар дөрөҫлөгөндә еткерелә килә.*

*Был мәҡәләләр йыйынтығында беҙ архив материалдарын, тарихи документтарҙы бергә туплап, хронологияһын төҙөп, тулы бер концепцияһына яҡын килеп, йәиһә данлы яҡташыбыҙ хаҡында көндәлек матбуғатта донъя күргән хеҙмәттәр аша уның образын тағы ла тулыраҡ, асығыраҡ күрергә ынтылыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Мәҡәләләр авторҙар һәм күрһәтелгән матбуғат баҫмалары редакцияһында бирелә.*

**Легендарный сын башкирского народа**

(к 100-летию М.Л.Муртазина)

Муса Лутович Муртазин — верный сын башкирского народа, выдающийся военачальник гражданской войны, видный государственный деятель, соратник многих виднейших полководцев Красной Армии, кавалер трех орденов Боевого Красного Знамени. За блестящую военную карьеру ему были вручены именное серебряное оружие Советского правительства и золотые часы.

М.Л.Муртазин прошел сложную, до предела насыщенную драматическими событиями жизнь, тесно связанную с судьбой родного народа. Первый военком

Башкирской республики, председатель ЦИК Малой Башкирии, слушатель Военной Академии, носящей ныне имя М.В.Фрунзе. Он стал после ее окончания известным деятелем Вооруженных Сил страны.

В 1937 году разделил участь многих — был расстрелян как «враг народа».

Муса Лутович Муртазин родился 20 декабря 1891 года в д.Кусюково (ныне село Маяк) Учалинского района. Отец его Лут Муртазин имел большую семью. Вспоминая об отце, Муса пишет: «Он научил нас быть суровыми, гордыми и честными...» Да, суровое детство — жесткий и твердый характер. Именно такое воспитание помогло Мусе Лутовичу с достоинством преодолеть все тяготы армейской службы в царской армии на Дальнем Востоке, получить солдатские награды, воюя с врагами России в Первой мировой «против немцев, румын и австрийцев» (из воспоминаний его). Вернулся с фронта убежденным большевиком и сразу же примкнул к мощному революционному движению, которое наметилось после Февральской революции в Башкирии.

1918 год — самый напряженный, драматический и трагический в жизни Муртазина. Он полон событий, бушевавших тогда по всей стране. Впрочем, таким год тот был в судьбе всего башкирского народа, который, ведомый своим национальным правительством во главе с Ахметзаки Валидовым, поднялся за обретение автономии. Муса Лутович сформировал и возглавил один из кавалерийских полков воссозданного Башкирского войска, всегда был на острие бурных событий. Именно он, командир 1-го кавалерийского полка, стал инициатором перехода башкирского народа на сторону красных, с которыми на первых порах не сложились отношения членов Башкирского шуро.

Начинаются жестокие бои с авангардными частями атамана Дутова, каждый из которых кончается победой муртазинцев. Сказывается огромный опыт комбрига, прогрессивность его стратегического мышления и тактической гибкости, которые не прошли мимо внимания командира М.В.Фрунзе. Именно по его предложению и при поддержке Заки Валиди кавалерийская бригада Мусы Муртазина была переброшена на один из самых уязвимых фронтов — Польский, где дела Красной Армии шли далеко не лучшим образом. Это произошло 29 апреля 1920 года, а в начале мая муртазинцы уже вступили в бой с белополяками у местечка Бровары. На другой день газета «Киевская мысль» писала, что «азиатская часть» нанесла удар по Броварам, уничтожив 60 офицеров.

Героическим подвигом Башкавбригады с полным правом можно назвать форсирование Днепра, в восторженных тонах описанное очевидцем событий А.Лизюковым, впоследствии генералом Советской Армии. Форсирование было проведено по всем правилам военного искусства, этим опытом пользовались советские войска в годы Великой Отечественной войны. Одна за другой следуют блестящие победы над противником у хутора Пиле и городка Горностайполя. Были захвачены сотни пленных, десятки орудий и пулеметов, офицерский штаб в полном составе. Именно за эти операции 3 ноября 1920 года Мусе Муртазину был вручен первый орден Боевого Красного Знамени. Указ о награждении вторым орденом был опубликован 31 декабря 1921 года: «...за выдающуюся стойкость и доблесть, проявленные в период наступательных боев под Варшавой и последовавших затем арьергардных боев...»

К тому времени Муса Муртазин был уже командиром кавалерийской группы 12-й Армии, которая приравнивалась к корпусу. Если не считать отдельных

периодов передышек, Муса Лутович провел в военных условиях семь с лишним лет кряду — начиная с первых дней империалистической войны. Командиру корпуса был предоставлен отпуск. Муртазин едет на малую родину, чтобы отдохнуть, но вместо этого окунается в новый омут напряженнейших событий. В тисках недоброжелателей, внутренних и внешних противоборствующих сил шло становление Башкирской автономной республики. Отчаявшиеся от голода и бесконечных притеснений, задавленные продразверсткой крестьяне подняли мятеж в юго-восточных регионах Башкирии. Нередко народные повстанцы смыкались с силами, ненавидевшими Советскую власть. М.Муртазин, в срочном порядке назначенный Башвоенкомом, вынужден формировать «летучие отряды» для подавления столь несвоевременного для молодой республики восстания. Там, где появлялся прославленный полководец, многие башкиры сами переходили на его сторону. Муса Лутович и его уполномоченные начали переговоры с повстанцами, которые чаще всего заканчивались результативно.

В 1921 году М.Л.Муртазин назначается председателем ЦИК БАССР. Однако долго работать на этом посту ему не удается, его приглашают в Москву, где он становится слушателем Военной академии (позже академия им. М.В.Фрунзе). После этого командует бригадой. В последние годы работает в Москве начальником 2 отделения Отдела по ремонтированию конского состава НКО. Воинское звание — комбриг.

Муса Лутович Муртазин был не только видным военачальником, государственным деятелем, но и писателем-журналистом с историческим уклоном. Он сам, без посторонней помощи, написал книгу «Башкирия и башкирские войска в Гражданскую войну», которая вышла в Военном издательстве в 1927 году. Через три года появилась его художественно-документальная повесть «В красной Башкирии».

100-летие Муртазина — знаменательная дата в истории многонационального народа Башкортостана.

Газим ШАФИКОВ, 1991 г.

## Муса батыр йәшәй күңелдә

*Учалы — ҡаһарман халҡымдың*
*Ҡалҡандай ҡалҡынған күкрәге,*
*Ер һаҡлап, ил яҡлап талпынған*
*Мортазин батырҙай күкрәнең...*

*Ҡәҙим Аралбай*

Эйе, шағир һүҙҙәре раҫ. Батша тәхеттәрен дер һелкетеп, изге яу ораны менән азатлыҡ көрәшендә илаһи дан ҡаҙанған, мәңгелек рухыбыҙ булмышына күтәрелеп, халыҡтың яҡты хыялында хаҡлы урын яулаған ажар ғәйрәтле батырҙарыбыҙ араһында яҡташтарыбыҙ, шанлы йылдарҙың легендар полководецы, дәүләт эшмәкәре Муса Лут улы Мортазиндың тыуыуына бөгөн 106 йыл.

1937 йыл. Шәхес культы ҡорбаны булыуына 60 йыл ғүмер үтеп киткән. Бындай шәхестәрҙең ғүмер араһы ни тиклем алыҫлашҡан һайын, уларҙың изге рухы шул тиклем халыҡ күңеленә яҡыная бара. Алыҫ-алыҫ йылдар төпкөлөнән әле булһа бөгөнгөләй Муса батыр тауышы килә.

*«Мин, Муса Лут улы Мортазин, Верхнеуральск өйәҙе (Ырымбур губернаһы) Көсөк ауылынанмын. РКП (б) ағзаһы (билет номерым 670992). 1891 йылдың 20 декабрендә тыуып, Байрамғол ауылында башҡорт мәҙрәсәһен тамамланым. 15 йәшемдән һабанға якландым, ә 19 йәшемдән мөғәллим булып эшләй башланым. 1912 йылда Байрамғол ауылында уҡытып йөрөгән еремдән армияға алындым. 1914 йыл башына ҡәҙәр ябай һалдат булып хеҙмәт иттем...»*

(«Муса Мортазин хаттары»нан).

Яҡташыбыҙ Муса Мортазиндың ябай һалдаттан полк командирына тиклем хәрби хеҙмәт юлы — ҡаһарманлыҡ юлы ул. 9-сы уҡсы артиллерия бригадаһының 1-се батареяһында бомбардир, фейерверкер хеҙмәттәрен атҡара. 1914 йыл Варшава янында, 1915 йыл Румыния фронтында өлкән фейерверкер званиеһында батырлыҡтар күрһәтә. Ғәйрәте ташып торған Муса Февраль революцияһында әүҙем ҡатнаша, VI Армия съезында, 1917 йылдың 8 майында Бөтә Рәсәй мосолмандарының I съезында делегат була. Бөтә Рәсәй мосолмандарының Ҡазанда үткән II съезына делегат итеп һайлана. Бөйөк Октябрь революцияһын Муса Лут улы тыуған ауылында ҡаршылай. Күбәләк-Тиләү волосы съезы хәрби етәксене I Бөтә Башҡортостан ҡоролтайына делегат итеп ебәрә. 1918 йылда Верхнеуральск өйәҙендәге башҡорт отрядтары командиры, июль айында Башҡорт Өлкә шураһы Мортазинды эскадрон командиры, һуңғараҡ 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры вазифаһына тәғәйенләй. Ҡомбриг Муса Мортазин Башҡортостан Республикаһы һәм Ҡыҙыл Армия вәкилдәре Измайлов, Вәлидов, Имаков һәм Бойда менән осраша, һөйләшеп-аңлашыуҙарҙан һуң ул Совет власы яғына сыға. Бригада 1-се армия составында Урал фронтында һуғыша, аҡтарға ҡараған Урал казактарын ҡыйрата. 1920 йыл Башкомандованиеның бойороғо менән Польша фронтында ҡаты һуғыштар алып бара. Ҡурҡмаҫ йөрәкле, һалдаттарына хәрби ҡатылыҡ та, аталарса хәстәрлек тә күрһәткән оҫта ойоштороусы Мусаны ошо юғары сифаттары полководец яһаны һәм полкташтары алдында сикһеҙ абруйын күтәрҙе.

Сикһеҙ һуғыш юлы дауам итә. Киевты, Черторецкиҙы, Ковелде, Гардбешовты, Холмды азат итеүҙә күрһәткән батырлыҡтары, поляктарҙың ҡурҡынысլы удар отрядтарын тар-мар иткән өсөн ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены, алтын сәғәт һәм «Эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының намыҫлы, ҡыйыу яугиры, айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы, 12-се армияның Революцион Хәрби Советынан һәм махсус бүлегенән» тигән яҙыулы көмөш ҡылыс менән бүләкләнә Муса Мортазин. Яугир-полководец тыуған ерҙәренә дан менән ҡайта. Көсөк (хәҙерге Маяҡ) халҡы батырҙы икмәк-тоҙ менән ҡаршылай. Был мәлдә ауылдар тирәһе, ғөмүмән, Тамъян-Ҡатай кантонында Выдрин бандалары хакимлыҡ ҡыла. «Бөтһөн Совет власы!» лозунгыһы аҫтында отрядтар ҡоторона. Муса Мортазин ни бары 17 кавалерист менән Ҡотой ауылы янында Выдрин байрағы аҫтында тупланған һәм ныҡлы ҡоралланған 400 баш күтәреүселәргә ҡапыл һөжүм итеп, уларҙы ҡыйрата. Бөрйән-Түңгәүер кантонының Йәтлембәт ауылында Мырҙабулатов бандаһын тар-мар итә, 500 әсирҙән башҡорт кавалерия дивизионы ойоштора. Муса Мортазиндың аҡ бандаларға ҡаршы рейды Туҡ-Соран, Ялан, Юрматы кантондары сиктәрендә дауам итә. Аҡтар Муса Мортазин исемен ишетеүҙән дер ҡалтырап төшә, Урал төпкөлөнә ҡаса. Легендар командирҙың

ҡаһарманлығы, халыҡ араһындағы абруйы артҡандан-арта. Данға күмелгән хәрби етәксе, дәүләт кимәлендәге эшмәкәр, оло шәхес, ялҡынлы оратор һәм юғары кимәлдәге мәҙәниәтле әҙип дәрәжәһенә күтәрелә ул. Уның 1927 йылда уҡ сыҡҡан «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында» исемле китабы был турала анығ һөйләй. Уның таланты, һүҙ оҫталығы, аналитик фекерләү ҡеүәһе — халыҡ хәлен, хәрби тарихты яҡшы белеүендә.

Ҡара золом 30-сы йылдарҙа Муса Мортазинға йәшәргә ирек бирмәй. 41 йәшлек баһадир ир-уҙаман ят ярлыҡтар аша халҡынан мәңгегә айырыла.

Исемдәре легендаға тиң шәхестең туған халҡына, ҡөҙрәтле еренә оло һөйөүе, милләт яҙмышын үҙ иңенә һалыуы, халҡыбыҙҙың милли үҙаллылығы, йөмһүриәте өсөн көрәшкән дәүләт эшмәкәренең оло йөрәкле булыуы — үҙенең әсәһенә, ҡустыларына, хәләл ефете Фәтиха ханымға, ҡыҙҙары-уландарына булған аталарса һөйөүе күңелдәрҙе яҡтырта.

20 декабрь — Муса Лут улы Мортазиндың тыуған көнө. Мөхтәррәм ҡәрҙәштәр! Әйҙәгеҙ, был көндө һәммәбеҙ ҙә батыр яугирҙың изге рухы алдында бер генә минутҡа тын ҡалайыҡ һәм әруахтар донъяһына тыныслыҡ теләйек. Ошо иҫкә алыу мәле күңелебеҙгә сафлыҡ та өҫтәһен! Арҙаҡлы шәхесебеҙ исеме йәшәүен дауам итә. Уның яҡты образы — рәссамдарҙың картиналарында, яҙыусыларҙың әҫәрҙәрендә. Муса Мортазин исемен бөгөн урамдар, хужалыҡтар йөрөтә, мәҙәниәт, әҙәбиәт өлкәһендә уның исемендәге премия булдырылған, тыуған ауылында йорт-музейы асылған.

...Милли ирек, үҙаллылыҡ тигән
Изге уйҙан өмөт өҙмәйек.
Өмөтөбөҙ, ғорур бөркөт булып,
Өйөрөлә бейек-бейектә.
Шул бөркөттәй, ғәзиз еребеҙҙә
Беҙ йәшәрбеҙ һәр саҡ иректә.
Рухыбыҙға ҡеүәт биреп торор
Ирек ҡошо — ғорур ыласын:
Бер ҡанаты уның — Әхмәтзәки,
Икенсеһе — Муса Мортазин!

*М.Ямалетдинов «Ил яҙмышы»*

Халҡы барҙың батыры ла бар. Муса батыр халыҡ рухында мәңге йәшәр!

Рәүеф ШАҺИЕВ, «Яйыҡ» гәзите. 1997, 18 декабрь.

## Славный сын башкирского народа

Герой гражданской войны, видный государственный деятель, пламенный борец за независимость Республики Башкортостан, кавалер двух орденов Красного Знамени и многих почестей Муса Лутович Муртазин всегда останется в памяти народной.

Родился он в деревне Кучуково (ныне Маяк) 20 декабря 1891 года. Сын бедняка, с 15 лет начал работать. С 19 лет у Мусы Муртазина начинается фронтовая жизнь и он до конца своей жизни остался верным военной присяге и офицерской чести. Современники героя оставили добрые слова о нем. Вот как его охарактеризовал видный деятель и ученый Заки Валиди: «Бескрайне умен и образован, среди солдат и офицеров имеет высокий авторитет, популярен среди военачальников. Незаменимый наездник, блестяще руководит боем, хитер в тактике...»

Командир кавалерийского полка Муса Муртазин прошел боевой путь от Урала до Вислы, разгромив ударные отряды поляков и румын. За героизм и мужество, проявленные в боях на Западном фронте, Муса Муртазин дважды награжден орденами Красного Знамени (один из первых кавалеров двух орденов сразу), за воинскую доблесть ему вручены золотые часы и серебряная сабля с золотой надписью от имени Рабоче-крестьянской Красной Армии.

После войны Муса Муртазин работал на ответственных государственных постах. 15 октября 1920 года назначен заместителем секретаря комитета кантона (г.Белорецк), 18 января 1921 года сессией БашЦИКа назначен наркомом по военным делам БАССР, позже наркомом по продовольствию республики с одновременным исполнением функций Башвоенкома. 1 марта 1922 года Муса Лутович Муртазин назначен председателем БашЦИКа и военным комиссаром БАССР. Позже направляется на учебу в Военную Академию в г.Москву.

Муртазин член РКП(б) с 1920 года, бессменный делегат и активный участник всех Всероссийских съездов партии и Курултаев мусульман.

Легендарный полководец известен нам и как мастер пера. Ему принадлежит книга мемуаров «Башкортостан и башкирские войска в Гражданской войне», написанная еще в далеком 1927 году. Эта бесценная книга рассказывает о бесстрашии и героизме башкирских конников при установлении Советской власти в республике. Сегодня с именем героя вернулось и его литературное наследие. О легендарном Муртазине написаны романы, поэмы, полотна (картины), его образ воссоздан на сценах театров. Учалинцы свято чтут светлый образ земляка. Имя героя носят улицы, музей в родной деревне. Вот уже несколько лет администрация Учалинского района ежегодно определяет лучших деятелей в области истории, культуры, просвещения, журналистики и вручает им премии имени Мусы Муртазина.

Рауф ШАГЕЕВ, газета «Серп и Молот». 16 декабря 1997г.

## Легендар полководец

(Муса Мортазиндың тыуыуына 110 йыл)

1918—1919 йылдарҙа Башҡортостан граждандар һуғышы менән солғап алынды. Дутовсылар, Колчактың аҡ гвардеецтары, төрлө фетнәселәр яңы һуғышҡа баш күтәрҙе. Фетнә ҡала-ауылдарҙы таланы, активты ҡырҙы, башбаштаҡлыҡ көндән-көн арта барҙы. Нығынып та өлгөрмәгән ҡыҙылдар власы, дошманға ҡаршы отрядтар туплап, походҡа сыҡты. Беҙҙең Башҡортостан тарихында шул дәүерҙәге данлыҡлы шәхестәр, ҡаһарман хәрбиҙәр, оҫта ойоштороусылар, ғәскәр башлыҡтары М.В.Фрунзе, В.К.Блюхер, В.И.Чапаев, А.М.Чеверев һәм башҡалар мәңгелектә ҡалды. Муса Лут улы Мортазиндың исеме лә шул уҡ йылдарҙа ошо исемлектә торорға тейеш ине. Шәхес культы ҡорбаны булып, күп тиҫтә йылдарҙан һуң ғына аҡланып, тыуған еренә, туған халҡына легендар шәхес, полководец һәм дәүләт эшмәкәре сифатында үҙенең бөтә булмышы, даншөһрәте менән ҡайтты.

...Уйҙар йомғағы геройҙы утлы өйөрмәләр эсенә алып инеп китә.

1919 йылдың көҙөндә Башҡортостан еренән Башҡорт кавалерия бригадаһы төньяҡ Ҡаҙағстан далаларында казактарға ҡаршы һуғыш алып бара. 1920

йылдың яҙында бригада аҡ поляктар менән һуғыша. Бында ул дошман тылы буйлап хәрәкәт итә. Башҡорт кавалерияһы, дошмандың ҡотон осороп, көтмәгәндә һөжүмдәр яһай. Совет ғәскәрҙәре командованиеһы уларҙың яуҙағы алыштарын, ҡаһарманлығын юғары баһаланы. Бригаданың дүрт тиҫтәнән ашыу яугирына Ҡыҙыл Байраҡ ордены тапшырыла. Билдәле булыуынса, бригадаға ҡаһарман Муса Мортазин етәкселек итә.

Ҡомбриг Муса Мортазин был һуғышта күрһәткән шәхси батырлығы һәм оҫта ойоштороу һәләте өсөн илдең юғары наградаһына ике тапҡыр лайыҡ була. Шулай итеп, батша армияһында рядовой артиллерист булып хеҙмәт итеүҙән башлап, данлыҡлы комбригҡа тиклем күтәрелә. Советтар Союзы Маршалы Семен Буденныйҙың һәм башҡа хәрби полководецтарҙың Муса Мортазиндың хәрби талантын, һоҡланғыс ҡаһарманлығын юғары баһалауҙарын беҙ тарихтан яҡшы беләбеҙ. М.Мортазин тәүҙә Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы, һуңынан ғәскәрҙәр менән командалыҡ итеп, төрлө фронттарҙа ике тиҫтәнән ашыу хәрби операция үткәрә һәм һәр саҡ еңеүгә өлгәшә. Ҡыйыу яугирҙың баҫҡыстан баҫҡысҡа күтәрелеүе, рухи һәм хәрби үҫеше уның тураһындағы тарихи мәғлүмәттәрҙә асыҡ күренә.

Муса Лут улы Мортазин 1891 йылдың 20 декабрендә Учалы районы Ҡөсөк (Маяҡ) ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белем алған. Хәрби-педагогия мәктәбен (1924), М.В.Фрунзе исемендәге Хәрби академия эргәһендәге юғары команда составының белемен камиллаштырыу курсын (1930) тамамлай.

Батша армияһында 1912 йылдың 21 ноябренән алып хеҙмәт итә, һуңғы хәрби званиеһы — кесе фейерверкер. Эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһында — 1919 йылдың 18 февраленән.

1919 йылдың 18 феврале — 20-се дивизияның 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры;

1919 йылдың 8 сентябре — 20-се дивизияның 1-се бригадаһы командиры;

1922 йылдың 1 апреле — Юғары Хәрби-педагогия мәктәбе тыңлаусыһы;

1924 йылдың 17 сентябре — М.Фрунзе исемендәге Хәрби академия тыңлаусыһы;

1928 йылдың 15 ғинуары — 11-се Төньяҡ Ҡавказ кавалерия дивизияһының 3-сө бригадаһы командиры;

1928 йылдың 15 марты — 8-се кавалерия дивизияһының бригада командиры;

1929 йылдың 1 декабре –ГУРККА-ның аттар һанын тулыландырыу идаралығы инструкторы;

1931 йылдың 1 феврале — РККА-ның атлылар составы буйынса идаралығының 2-се секторы начальнигы ярҙамсыһы;

1932 йылдың 15 авгусы — РККА-ның атлылар составы буйынса идаралығының сектор начальнигы;

1933 йылдың 26 июне — 2-се сектор начальнигы;

1935 йылдың 20 ғинуары — Оборона Халыҡ Комиссариаты атлылар составының аттар һанын тулыландырыу бүлеге бүлексәһе начальнигы;

Муса Мортазинға 1935 йылдың 2 декабрендә комбриг хәрби званиеһы бирелә.

Граждандар һуғышынан һуң Башҡортостан Республикаһының Хәрби эштәре халыҡ комиссары, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе булып эшләй.

Ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған... Данлыҡлы комбригтың өсөнсө Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланыуын да яҡташтары белде, ниһайәт. Билдәле журналист, тынғыһыҙ эҙәрмән һәм яҙыусы Рәүеф Насировтың «Ыласын йөрәклеләр» очергынан, архив документтарынан күренеүенсә, М.Мортазин 8-се кавалерия дивизияһында энергиялы һәм емешле эшләгәне өсөн өсөнсө Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған. Артабан шундай юлдарҙы иғтибарға алайыҡ: «М.Мортазин үҙе лә байтаҡ ҡаһарман яугирҙарҙы яҙып үтә, уларҙың исемлеген бирә. Барлығы 78 кешене теркәй исемлеккә. Шуныһы фәһемле: 78 батырҙың бишәүһе — Мортазиндар. Бына улар: Ибраһим Мортазин — 28-се полк командиры, Дауыт Мортазин — эскадрон командиры, Х.Мортазин — взвод командиры, Әхмәҙи Мортазин — 5-се полктың хужалыҡ бүлеге начальнигы. Барыһы ла иң юғары награда — Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған...» Тарихи документтар шул турала һөйләй; сәғәте, көнө, йылы менән күрһәтелгән был тарихи аманат Муса Мортазиндың граждандар һуғышы йылдарында өс тапҡыр Герой булғанын раҫлай. Был беҙҙең өсөн ғорурлыҡ!

Легендар полководец, граждандар һуғышының өс тапҡыр Геройы Муса Мортазиндың ҡаһарманлығы Ҡош юлы булып халыҡ күңеле аша мәңгелеккә, киләсәктең киләсәгенә күсеүен дауам итер.

Рәүеф ШАҺИЕВ, «Яйыҡ» гәзите. 2001йыл, 20 декабрь.

## Прозала Муса батыр асылы

(Башҡорт халҡының бөйөк улы Муса Мортазиндың тыуыуына 120 йыл)

Нәфис әҙәбиәттә тарихи шәхестәребеҙ хаҡында тиҫтәләгән романдар, повестар, драмалар һәм поэмалар, шиғырҙар донъя күрҙе. Улар араһында прозала Салауат Юлаев, Зәки Вәлиди, Муса Мортазин образдары хаҡлы рәүештә үҙәк урынды биләй. Бөгөн ошо героик өс тағандың береһе — Муса Мортазиндың милли прозалағы сағылышына аҙмы-күпме күҙ һалырға ине. Был йәһәттән Муса Лут улы Мортазин шәхесен юғары художестволы кимәлдә асыуҙа Я.Хамматов, Р.Солтангәрәев, М.Ямалетдин емешле ижад итте.

Аяу белмәй иҫкән ваҡыт еле
Әйләндерә тарих төргәген.
Дәүер-улаҡтарҙан он ағыла,
Ел осора кәбәк тигәнен.
Сыҡҡан саҡта тотош төшөнсәләр
Тынсыу идеологик ҡыҫанан,
Күҙ алдына килә ике шәхес,
Ике башҡорт, ике уҙаман.
Беренсеһе Зәки — бөйөк ғалим,
Әүлиә зат, аҡыл эйәһе.
Икенсеһе Муса — ярһыу яугир,
Башҡортостандың аҫыл һөйәге, —

тип яҙғайны шағир М.Ямалетдин үҙенең «Ике яҙмыш» исемле поэмаһында.

«...Мин, Муса Лут улы Мортазин, Верхнеурал өйәҙе Көсөк ауылынанмын. РКП(б) ағзаһы (билет номерым 670992). 1891 йылдың 20 декабрендә тыуып, Байрамғол (хәҙерге Яңы Байрамғол. — ***Р.Ш.***) ауылында башҡорт мәҙрәсәһен тамамланым. 15 йәшемдән һабанға ялландым, ә 19 йәшемдән мөғәллим булып

эшләй башланым. 1912 йылда Байрамғол ауылында уҡытып йөрөгән еремдән әрмегә алындым. 1914 йыл башына ҡәҙәр ябай һалдат булып хеҙмәт иттем...» (Муса Мортазин хаттарынан).

Муса Мортазин образын асыуҙа әҙиптәрҙең үҙ алымдары булһа ла, уларҙың был герой яҙмышына ҡарата уртаҡ фекерҙә тороуҙары бер бөтөн концепцияға килтерә. Әҫәрҙә геройҙың тыуған яғы, бала сағы, ағай-энеһе, ғаиләһе, фронтташ дуҫтары, илдә барған аяуһыҙ, үлемесле сәйәси көрәш, яу юлдарындағы трагик ваҡиғалар — һәммәһе лә Муса яҙмышы аша синтезлана. Геройҙың үҫеш баҫҡыстары күсәгилешле динамик хәрәкәттә асылыуы менән уңышлы. Граждандар һуғышы осорондағы эпизодтар — ул Көсөк ауылындамы, Верхнеурал өйәҙендәме, Күбәләк-Тиләү волосындамы, Аҡтүбә—Ҡантүбә яуындамы, Варшава, Румыния, Маньчжурия фронттарындамы, Мәскәү—Өфө тарафтарындамы, һуңғыһы — Лефортово төрмәһендәме — уҡыусының күҙ алдында һәр саҡ легендар яҡташыбыҙ Муса Мортазин торор. Әҫәрҙәрҙең геройы бар бөйөклөгөндә үҙенең художестволы сиселешен тапҡан. Беҙҙең күңелдәрҙә ҡыйыу яугир Мусаның йәшендәй балҡып китеүе бөтмәҫ уйҙар ҡалдырыр, сикһеҙ ғорурлыҡ тойғолары ла уятыр.

Мәүлит Ямалетдиновтың «Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым» повесында Муса Мортазиндың бөйөк тә, трагик та образы менән Лефортово төрмәһендә йөҙгә-йөҙ осрашабыҙ.

«...Комбриг Мортазин үҙенең артынса Лефортово төрмәһенең шомло ишеге шалтыр-шолтор ябылғас ҡына, бөгөнгө таңдың аяуһыҙ ваҡиғалары төш түгел, ә ҡот осҡос хәҡиҡәт икәнлегенә төшөндө. Ваҡиға бөгөн — бер меңдә туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йылдың беренсе майында, иҫ китмәле матур иртәлә, үҙенең көтөлмәгәнлеге һәм дәһшәтлеге менән аяҙ көндә күкрәгән күктәй уға ябырылды...

Таш төрмәнең тар ғына камераһына килеп инеү менән, ул үҙен тимер ҡоршауға эләккәндәй хис итте. Кемдеңдер ауыр, ҡотолғоһоҙ ҡаты ҡулдары күмәгәйенән алып, торған һайын нығыраҡ быуғандай, таш иҙәнгә һалып иҙергә теләгәндәй...

Атаҡлы комбригтың мөһабәт, мыҡты кәүҙәһе килеп ултырыуҙан, ҡаҡ һике шағыр-шоғор итеп ҡалды, тик ул быны ишетмәгәндәй, терһәктәрен тубығына, эйәген көрәк дәүмәле устарына терәп, уйға сумды. Иртәнге ваҡиғалар уның күҙ алдынан тағы ла бер ҡабат ап-асыҡ булып үтеп киттеләр...»

Яҙыусы геройҙың упҡынға осоп, билдәһеҙлеккә атлауын, ғаиләһе менән һуңғы тапҡыр хушлашыуын, драматик көсөргәнеште монолит күрһәтеүгә өлгәшә.

«...Ишек асылыуға, өйгә өс ҡоралл ы конвоир эйәрткән НКВД комиссары килеп инде.

— Комбриг Мортазинмы?

Комиссарҙың тауышында инабат юҡ ине.

— Эйе. Ә нимә кәрәк?

— Һорауҙар бирмәҫкә! Ҡоралығыҙҙы тапшырығыҙ ҙа, тиҙ генә йыйынығыҙ! Бына ордер.

Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, ниңәлер Мусаның күҙ алдына алыҫ Башҡортостандың иң төпкөлөндә, тауҙар ҡуйынында ятҡан Көсөк ауылы килеп баҫты, ваҡытының керпек ҡаҡҡандай ғына бер миҙгелендә ҡолағында атаһы яратып йырлаған «Ғүмәров» көйө сыңлап китте:

Аҡ сабаҡтай кеүек килеп ҡаптым,
Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым.

Муса Лутович тиҙ үк иҫенә килде — хыялға бирелеп торор мәлме?..

— Балаларҙы һаҡла! — тине ул йөҙөнә йылмайыу билдәләре сығарырға тырышып... Ул тупһанан аша атлап сыҡҡас, артҡа боролоп бер ҡараны. Ҡатынының йәш монары аша бөткөһөҙ хәсрәт бөркөүсе күҙ ҡарашы, кескәй Аҫҡарҙың сая-ланып илаған тауышы, ике ҡыҙының: «Атай!» — тип өҙгөләнеп ҡысҡырыуы бергә ҡушылып, Мусаның йөрәген телеп үттеләр ҙә, бәғеренә ауыр таш булып яттылар...»

Уҡыусы, әлбиттә, быңдай көсөргәнешле күңел кисерештәрен үҙ йөрәге аша үткәреп, әҫәр геройының трагик яҙмышын ысын күңелдән уртаҡлаша кеүек. Эйе, яҙыусы үҙ геройының күңел төштәренә тәрән экскурсия яһай, кисерештәренә тулыһынса үҙаллылыҡ бирә. Әҫәр геройы ваҡиғалар солғанышында юғалып ҡалмай, уның ҡоло булып, артынан эйәрмәй, ә үҙе шул көсөргәнешлекте ойоштора, уның башында бара, көрәшә, еңелә лә, еңә лә. Был яҙыусы Мәүлит Ямалетдиновтың тормош позицияһы, йәиһә герой концепцияһына тик үҙ художестволы алымы аша яҡын килеүе лә. Әҫәрҙәге тарихи шәхес асылы шуның менән көслө, уның күңел халәте уҡыусыны ла уйланырға, кисерә белергә, шул ваҡиғаларға бөгөнгө көн ихтыяжынан ҡарарға, һабаҡ алырға һәм дә баһа бирергә саҡыра ла.

Муса Мортазиндың характерын асыуҙа күренекле прозаик Рәшит Солтангәрәев тә «Осто бөркөт» повесында үҙ маһирлығын күрһәткән.

«...Эйе, бригада һуғышсылары командирҙарын ярата. Уны иң элек башҡорт булғаны өсөн яраталар. Башҡортлоғо өсөн дә, аҡтарҙан да, ҡыҙылдарҙан да ҡурҡып тормаҫ ҡыйыу ир булғаны өсөн дә, аҡылы, белеме, тәүәккәллеге, хатта ҙур кәүҙәле булғаны, урыҫса яҡшы белгәне өсөн дә яраталар. Тап быңа ошондай командир кәрәк тә был егеттәргә, ошондай башлыҡҡа һыуһаған улар...»

Командир булһа ла, башҡортса һөйләшә, хатта ваҡыты менән фарманды ла башҡортса бирәп ебәрә. Бер һүгенеүе ни тора, ауылыңа ҡайтҡандай булып ҡалаһың. Һуҙып йырлап та ебәрә. Сыҡһа сыға бит башҡорттан кеше!.. Муса Мортазин барҙа улар хур булмаясаҡ, берәүҙән дә еңелмәйәсәк!

Шундай тышҡы портрет менән эске донъя динамизмы героик шәхесте тағы бейеккә күтәрә, уҡыусы күңелен бермә-бер байытып ебәрә. Башҡорт прозаһында үҙенең уҡымлы тарихи романдары менән халыҡ һөйөүен яулаған Яныбай Хамматов «Комбриг Мортазин» романында данлыҡлы шәхес хаҡында былай яҙа:

«...Ун икенсе армияла ғына түгел, бөтә фронт буйынса дан яулаған Муса Мортазиндың исеме киң билдәле ине. Төркөм командующийы булараҡ та ул үҙен һынатманы. Дошман ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштар уңышлы тамамланған һайын, уның абруйы үҫкәндән-үҫә барҙы. Мортазин үҙен ысын мәғәнәһендә полководец итеп күрһәтеүгә өлгәште...» Башҡорт халҡының ғорур, батыр һәм һуғышсан булыуы, үҙ дәүләте юҡлығы арҡаһында бәләгә тарыуы хаҡында Муса Мортазиндың фронтташ иптәштәре менән әңгәмәһе генә лә уның фекерләү кимәленең юғарылығын, үҙ халҡының ялҡынлы патриоты икәнлеген күрһәтә ала. Яҙыусы был сәйәси диалогтарҙа үҙ геройының мәҙәни һәм сәйәси потенциалын тулыһынса аса алған.

Ҡыҫҡаһы, үрҙә әйтелгән сәсмә әҫәрҙәр Муса Мортазиндың тулы һынлы образын бөгөнгө көн уҡыусыһы йөрәгенә еткерә алдылар. Ул — иң тәүҙә башҡорт халҡының тоғро улы, ҡаһарман яугир, хәрби етәксе, ил күләмендәге дәүләт эшмәкәре, үткер, һәләтле публицист, ут йөрәкле патриот та. Шул яғы менән героик шәхес халыҡ күңелендә ҡала килә.

«...Ҡөтмәгәндә күк күкрәне — шалтырап камера ишеге асылды. Муса һикереп торҙо: уға килделәр!

— Мортазин, сығырға!..

— Хушығыҙ, иптәштәр! — Мусаның тауышы көр сыҡты. Ул инде хәҙер ирек-ле кеше — тик үлем генә ҡалды, ә ҡалғанына бер кемдең ҡыҫылырға, бойорорға хаҡы юҡ... Осто бөркөт! Аттылар уны. Үҙенекеләр атты. Үҙенекеләрме икән?!.» (Р.Солтангәрәев «Осто бөркөт»).

Бик күп йылдарҙан һуң яугир-полководец әйләнеп ҡайтты. Героик шәхестең 100 йыллығына тыуған ауылы Ҡөсөктә музей асылды, ҡаланың бер матур урамына исеме бирелде, район хакимиәтенең герой исемендәге премияһы булдырылды. Былар бөтәһе лә бынан 20 йыл элек эшләнде. Иртәгә яҡташыбыҙҙың тыуыуына 120 йыл тула. Башҡорт халҡының гүзәл традицияларын уның арҙаҡлы шәхестәре дауам итә. Республика район күләмендә уларҙың даһилығына, атап әйткәндә, Салауат Юлаевҡа, Зәки Вәлиди Туғанға, Шәйехзада Бабичҡа, Һәҙиә Дәүләтшинаға, Зәйнәп Биишеваға, Заһир Исмәғилевҡа, Мифтахетдин Аҡмуллаға, Муса Гәрәевҡа, Александр Матросовҡа, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллинға, Хәкимйән Әхмәтғәлинға һ.б. һәйкәл-бюстар ҡуйылған. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең дә исемен мәңгеләштереү менән бергә уның һәйкәлен булдырыу хаҡында хөкүмәт саралар күрә. Күп райондар хакимиәттәре үҙ ерлегендә тыуған тарихи шәхестәренә арнап һәйкәл-бюстарын булдырҙылар. Беҙҙең Учалы ерлегендә аҙ тыуғанмы ни ул ир-уҙаман, хеҙмәт һәм һуғыш геройҙары, арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ!? Ҡаланың үҙәк майҙанында Ҡарас сәсән, Йосоп Арыҡов, Бәпәнәй Төрөпбирҙин, Зәйнулла Рәсүлев, Исмәғил Солтанов, граждандар һуғышы геройы, өс тапҡыр Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры (тимәк өс тапҡыр Герой исеменә лайыҡ! — ***Р.Ш.***), дәүләт эшмәкәре, легендар полководец Муса Мортазин, Советтар Союзы Геройҙары Петр Кровко, Михаил Ташкин, Шакирйән Мөхәмәтйәнов (А. Матросов), Жәүҙәт Сөнәғәтуллин, Хәкимйән Әхмәтғәлин, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Ғөбәй Фәтҡуллин, Хәким Мөхөтдинов, Рамаҙан Ниғмәтуллин, Фазулла Шәйәхмәтов, Яныбай Әхмәтйәновтарҙың, Геройҙар аллеяһын асып, һәйкәлдәрен ҡуйһаҡ, бөгөнгө йәш һәм киләсәк быуынға матур тәрбиә өлгөһө биреп, изге аманат ҡалдырыу һис тә яҙыҡ булмаҫ ине, тип уйлайым. Муса Мортазиндың героик рухы шуны өнәй, был милли рух Ҡош юлы булып, халыҡ күңелен баҙлатып, мәңгелеккә, киләсәктең киләсәгенә күсте, күсә килә. Шулай булһын, изге теләктәр тормошҡа ашһын.

Рәүеф ШАҺИЕВ, «Йайыҡ» гәзите. 2011 йыл, 20 декабрь.

**Рәүеф Насиров. Ҡылыс ҡында килешә.**
**Алты ҡырлы Мортазин**

...1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Ә.Ҡарамышевҡа рапорт.

Һеҙҙең полкҡа буйһондоролған 1-се эскадрон командиры хорунжий Мортазин үҙенең эскадроны менән ике аҙна самаһы минең отрядта булды һәм ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә лә үҙен бик яуаплы тотоуы, эште ойоштора белеүе арҡаһында отрядҡа ҙур булышлыҡ итте. Ҡыҙылдар 23 августа, Еҙем ауылы эргәһендәге һуғыштан һуң, ниһайәт, ауылды ҡалдырып киткәс, уларҙы эҙәрләргә тип, мин арттарынан Мортазинды ебәрҙем...

Мортазин эскадроны, беҙҙе Эҙем йылғаһында ҡыуып етеп, пехотаның сигенеүен ҡаплап торҙо — был бурысты ул һоҡланырлыҡ итеп башҡарҙы, бәрелештә ни бары өс ат сафтан сыҡты...

Һеҙҙән уны ҙурыраҡ чинға күсереүегеҙҙе һорайым. Ошо үтенес белдереүемде мин үҙемдең намыҫ эшем тип һанайым...

Верхнеуральск отряды начальнигы Папавик.
1918 йыл, 28 август. Архангельск заводы.

...1918—1919 йылдарҙа Муса артынан яуҙарға сапҡан, һуңынан, 30-сы йылдарҙа ла уның менән бик йыш осрашҡан Әбйәлил халҡының Мусаны «алты ҡырлы Мортазин» тип атауы бер ҙә юҡҡа түгелдер. Ябай, бер ҡатлы йәки ике ҡатлы ла түгел, йоморо һәм шар ише шыма ла түгел, ә «алты ҡырлы», ниндәй генә шарттар килеп тыумаһын, үҙ характерын юғалтмаған, ләкин һис көтөлмәгән яҡтарын, сифаттарын күрһәтә алған етәксе...

...Муса Мортазиндың атылыр алдынан ярты сәғәт кенә алда төшөрөлгән һәм Мәскәү архивында табылған фотоһы 1992 йылда республика гәзиттәрен йөрөп сыҡҡайны инде. Йән тетрәндергес һүрәт! Йылдар аша үтеп, беҙҙең йөрәктәргә килеп ҡаҙалған батыр ҡарашы. Ҡан һауған һәм аҙ ғына йәштәре лә йылтыраған күҙҙәрҙә, әрнеү менән бергә уланын яҡлап алып ҡала алмаған халҡына үпкә тойғоһо ла уҡып була һымаҡ... Тап ошонда Мортазиндың ҡулға алынғанға тиклем үк яҙған һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү урынлы булыр: «Ун бер йыл булды инде: минең бөтөн эшмәкәрлегем иптәштәремдең күҙ алдында үтте — улар мине яҡшы белә. Мин һәр ваҡыт фәҡир-фоҡаролар эргәһендә булдым һәм кулактар, аҡ офицерҙар, мосолмандарҙың — башҡорттоң, татарҙың да — руханиҙары менән көрәштем. Партияға, Ҡыҙыл Армияға, Советтар Союзына үҙемдең бирелгәнлегемде иҫбатлап килдем. Колчакҡа, аҡ поляктарға, Вәлидовтың аҡ гвардиясыларына ҡаршы һуғыштым. Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт иткән бөтөн йылдарҙа ла миңә кем мәнфәғәте яҡын икәнен, кемде яҡлауымды, кемгә ҡаршы булыуымды күрһәттем...»

### Ҡәҙим Аралбай. Таналыҡ тауышы.
### Ғәйрәт (Муса Мортазинға арналған триптихтан)

Ҡайнағандыр һиндә ажар ғәйрәт,
Булғанғалыр даулы заманың.
Шуғалыр ҙа халҡың, илең һиңә
Йөктө һалған, белмәй саманы.
Батша тәхеттәрен дер һелкетер
Ажар ғәйрәт — халыҡ ғәйрәте.
Шул ғәйрәтте һындырмаҡсылар бит,
Ҡол булырға ныҡыш өйрәтеп.

Муса батыр,
Һиңә күскәндер, тим,
Урал тауҙарының ғәйрәте.
Ҡәмемәйме Урал ғәйрәте лә,
Ҡөн-төн яҡкас тәнен көйрәтеп?

...Телем,
Ерем,
Иркем тип янғанда,
Ҡырҡ кәртәләр ҡалҡһа алдында,
Муса рухлы ярһыу күҙәнәктәр
Баш күтәрә алһыу ҡанымда...

**Мәүлит Ямалетдин. Һаумы, зәңгәр һауа!**
**Ике яҙмыш (поэманан өҙөк)**

...Мортазин да ниҙәр ҡылмаҫ ине,
Зәки һымаҡ етһә һикһәнгә?!
Вәлидиҙән ҡалды том-том ғилем,
Мәшһүр исем, яҡты эҙ ҡалды.
Уны эҙәрләгән большевизм
Бөгөн килеп үҙе тарҡалды.
Мортазиндан ҡалды «дошман» тигән
Нахаҡтарҙан-нахаҡ яманат.
Шул нахаҡтың шомло ҡоһорҙары
Тоҡомона төштө нисә ҡат?!
Вәлидиҙән ҡалды ике бала —
Икеһе лә мәшһүр ғалимдар.
(Йортто баҫып алыр, әммә ҡотто
Нисек тартып алһын залимдар?!)

Мортазиндан ҡалды алты бала,
Яҡлаусыһыҙ алты кескәй зат:
Имсәк бала — Аҫҡар — сәңгелдәктә,
Ун етелә ҙуры — Зөбәржәт,
Уларынан башҡа йәнә дүртәү —
Ләйлә, Нәйлә, Шәүрә, Ынйыҡай.
Һөлөк һымаҡ ирҙәр башын юйғас,
Кемгә ҡалыр икән донъяҡай?!
Аталарын атҡас, был етемдәр
Ҡайҙан ғына эҙләр таяныс?
Йыйын дошман тулы ҙур ҡалала
Яңғыҙ ҡалыуҙары аяныс.

...Үпкә шешеп, Аҫҡар донъя ҡуйҙы —
Бер йәше лә хатта тулманы.
Иңдәренә төшкән хәсрәт менән
Фәтихаға ни хәл итергә?..

...Йөҙәрләгән шәхес кәмһетелә,
Меңәрләгән яҙмыш ҡыйрала.
Мәскәү һалған шомдоң күләгәһе
Барлыҡ тоҡомона тарала.

Ғаиләһе күтәрелә алмай —
Ҡырау һуҡҡан гөлдәй бөгөлә.
Золом еңә.
Муса Мортазиндың
Нәҫел ебе тамам өҙөлә...

Рухыбыҙға ҡеүәт биреп торор
Ирек ҡошо — ғорур ыласын:
Бер ҡанаты уның Әхмәтзәки,
Икенсеһе — Муса Мортазин!

**Роберт Байымов. Сыбар шоңҡар**

«...Әлеге Күбәләк-Тиләү волосында бола сығарған унтер-офицер Муса Мортазинды ла Зәки Вәлиди ошонда һынап ултырҙы. Эре һөйәкле, ҡыйыу ҡарашлы мөһабәт был ир — һис шикһеҙ ҡаһармандар затынан. Башҡалар һымаҡ ҡоролтай барышында урындан ҡысҡырып ултырманы, кәрәк саҡта баҫып, йә трибунаға сығып һөйләй. Тартынмай, үҙен ҡыйыу, иркен тота, һүҙҙәре тос, һәлмәк. Уны тыңлайҙар, эргәһенән ир-ат өҙөлмәй. «Бындайҙар башҡорт милли хәрәкәтенән ситтә торорға тейеш түгел, — тип уйлай Зәки Вәлиди. — Ҡойоп ҡуйған ойоштороусы. Үҙенә лайыҡлы эш кенә йөкмәт, тау аҡтарыр...»

...Зәки Вәлиди ошо хаҡта Әмир Ҡарамышевҡа ла ниҙер әйтергә теләп боролғайны, өлгөрмәне, тауҙар эсендә өҙлөкһөҙ күк күкрәгәндәй, дөп-дөп килгән гөрөлдәү ишетелә башланы. Ул да булмай, урман ауыҙынан, йәйәүле колонналарҙы урап, атлы отряд сабып килеп сыҡты. Унан тағы, тағы... Иң алдағы һыбайлы дәү кәүҙәле, эйәрендә ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай, мөһабәт ултыра.

— Мортазин! Муса Мортазин! — тиештеләр Зәки Вәлиди эргәһендәгеләр һоҡланып. — Атын ҡараһаң уның, үҙе кеүек эре һөйәкле, ырамлы саба... Ҡабырғалары ялт-йолт килә...

— Күбәләк-Тиләү дейеүе...

Ә тау эсенән, урман ауыҙынан отряд артынан отряд атылып сыға тора. Муса Мортазин үҙе төҙөгән икенсе атлы полк был. Күптәре, командирҙары һымаҡ, Күбәләк-Тиләү ырыуынан, табындар... Ҡобағош һәм Ҡарас сәсән рухтарын йөрөтөүселәр... Хәҙер атлы полк ике урман араһындағы бөтә яланды иңләп саба. Бына, исмаһам, ғәскәр, бына, исмаһам, хәрби тәртип! Командирҙарына оҡшап, башҡаларҙың да кейемдәре ыҫпай, ҡоралдары етеш, эйәрҙәренә ҡушылып үҫкәндәй, ныҡ ултыралар. Ҡыйыулыҡтары, хәрби наҡыҫлыҡтары ла командирҙарыныҡына оҡшаһа, тәүәккәлләп был яугирҙарға ҡаршы сыҡҡан дошманға Хоҙай үҙе ярҙам бирһен!.. Ә ғәскәрҙәр һаман ағыла ла ағыла торҙо...

**Мәүлит Ямалетдин. Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым**

...Коридорҙа, ваҡыттың ҡотолғоһоҙ икәнлегенә ишара яһап, яңғырап торған аяҡ тауыштары көсәйгәндән-көсәйә килеп, кинәт тынып ҡалды. Комбригтың уйҙарын ҡырт бүлдереп, шалтыр-шолтор тимер ишек асылды. Ҡайҙандыр икенсе, ят донъянан ишетелгәндәй ҡырыҫ, йән өшөткөс һалҡын тауыш яңғыраны:

— Мортазин!

— Эйе! — Муса талған тәнен яҙа-яҙа аяғүрә баҫты.

— Допроска!

Быны ишеткәс, бөгөн икенсе тапҡыр Мусаның күҙ алдына ғәзиз Башҡортостандың иң төпкөлөндә, тауҙар ҡуйынында ятҡан Көсөк ауылы килеп баҫты, ҡолағында атаһы яратып йырлаған «Ғүмәров» көйө сыңлап китте:

«Аҡ сабаҡҡай кеүек килеп ҡаптым,
Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым...»

**Рәшит Солтангәрәев. Осто бөркөт**

...Генерал Эллерс-Усов комбригтың янауын һиҙмәне түгел, әммә быға иғтибар итмәне, киреһенсә, ярһып китте.

— Һин, Мортазин, офицер түгел, ә большевикһың! Ғәскәрең дә, үҙең шикелле, большевизм менән ағыуланған! — Генерал башын ҡалҡытып, ҡорбанына ырғырға әҙерләнгән бәләкәй йыланға оҡшағайны.

Мусаның күҙҙәре баҙлап китте, ауыр ҡараштары йәшен уғы шикелле ялтланы. Үҙе ағас башындағы һеләүһенгә оҡшап тора:

— Мин башҡорт бригадаһы командиры! — Мусаның тауышы ҡаты һәм янаулы сыҡты. — Мин үҙ илемде, үҙ халҡымды яҡлап һуғышам, ә һинең шикелле, генерал, кемдеңдер ҡанын ҡойоп, фельдмаршал дәрәжәһе алыр өсөн йөрөмәйем!..

...Мусаны аяҡ өҫтө тотоп язаланылар. Ултырырға ла, ятырға ла, хатта аяғыңды алмаштырып баҫып торорға ла ярамай. Тик баҫып тор! Өҫтәл янында, һорау алған тәфтишсе янында тор... Көндәр, төндәр буйына... Резина таяҡ менән туҡмауҙары ла, тырнаҡ аҫтына энә ебәреүҙәр, ике ҡулыңдан түшәмгә аҫып ҡуйыуҙар, тоҙло һыу менән клизма яһап, көндәр буйына һыу бирмәй тотоуҙары ла, тәнеңә тәмәке төпсөгө баҫып һүндереүҙәре лә, түбәңә өҙлөкһөҙ тамсы тамыҙыуҙары, йән ереңә тибеүҙәре лә, башыңды парашаға тығыуҙары ла ул тиклем үк ғазаплынан түгелдер... Ә бына тәүлектәр буйына ҡымшанмайынса баҫып тороуҙары һәм йоҡо күрмәүҙәре... Өләсәйҙең әкиәттәре иҫкә төшә: «Ҡатынан-ҡаты ни ҡаты?» — тип һорағандар. «Ат тояғы!» — тип яуап биргән, имеш. «Әсенән әсе ни әсе?» «Үлем әсеһе әсе», «Татлынан татлы ни татлы?» «Йоҡо татлы»... Шулайҙыр шул...

**Яныбай Хамматов. Комбриг Мортазин**

...Тәпәшәк, тап-тар, ҡыҫыҡ, һауаһыҙ карцерҙа тәүлектәр буйы ҡуҙғалмай, гел бөкөрәйеп торған ваҡытта, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә тырышып, тыуған Уралындағы тәбиғәт күренешен күҙ алдына килтерҙе. Ана Шырлыҡ, Сураман, Оҙонғор, Яһаҡай, Бурама, Ишеғол тауҙары менән уратып алынған Көсөк ауылы ҡыш мәлендә лә ниндәй һоҡландырғыс!.. Тик шуныһы йәл, тыуған ауылыма ни өсөн Көсөк исеме ҡушылыуын күптәр белмәй. Был хаҡта тарих менән ныҡ ҡыҙыҡһынған Шәүрә ҡыҙына ла һөйләргә тура килмәне бит, исмаһам! Шәүрә сабый сағынан уҡ отҡор, башҡорттарҙың тарихын тыңларға әүәҫ булды. Көсөк ауылы тарихы, моғайын, ҡыҙыҡһындырыр, унда боронғо замандан батырҙар өҙөлмәүе ғорурлыҡ тойғоһо уятыр ине. Сөнки ауылға Көсөк исеме ҡушылыуына Мусаның олатаһының олатаһының олатаһы Кирам батыр сәбәпсе булған, ти.

Ҡырҡаҙаҡ ғәскәрҙәре ябырылып килеүе тураһында ишеткәс, Кирам батыр бәләкәй генә отряд менән уларға ҡаршы сыҡҡан һәм ҡырҡаҙаҡ батыры менән икәүҙән-икәү көс һынашырға теләк белдергән.

Ҡырҡаҙаҡ ғәскәре башлығы, хурлыҡҡа ҡалырға теләмәйенсә:

— Истәк, һаҡлан, — тип ажарланып Ҡирам батырға ташланған.

Ике батыр, бер-береһен еңә алмай, оҙаҡ алышҡан. Иң хәүефле минуттарҙа аттары ситкә янтайып, хужаларын үлемдән һаҡлап алып ҡалған булғандар. Ҡырҡаҙаҡ ғәскәре башлығының сәме ҡуҙғалған һәм, ҡылысы менән һелтәнә-һелтәнә, Ҡирам батырға һөжүмде көсәйткән. Ҡирам батыр ҙа ҡаушап ҡалмаған. Ул, яйын тура килтереп, ҡырҡаҙаҡ ғәскәре башлығының күкрәгенә үтәнән-үтә сәнсә лә, ҡылысына йоҡҡан ҡанды ялай. Башлыҡтары үлеүенән дә бигерәк, Ҡирам батырҙың ҡыланышына асыуы ҡабарған ҡырҡаҙаҡтар:

— Көсөк!.. Көсө-өк! — тип һөрән һалып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша кирегә табан сапҡандар.

Шул ваҡиғанан һуң Ҡирам йәшәгән ауыл Көсөк исеме менән йөрөтөлә башлаған, ти...

...1956 йылдың бер көнөндә, эштән ҡайтып барышлай, Шәүрә Мортазина, ғәҙәтенсә, почта йәшниген асып ҡараны. Гәзит һәм журналдар араһындағы хатты коридорҙағы электр лампаһы яҡтыһында тороп уҡыны ла фатирына атылып барып инде һәм үҙен-үҙе онотоп ҡысҡырҙы:

— Әсәй, әсәкәйем, һөйөнсө!

Бер ни аңламаған Фәтиха аптырап, баҫҡан урынында тапанды.

— Ни булды, ҡыҙым?

— Минең хатҡа яуап килде!.. Атайымды аҡлағандар, — тип әсәһен шашынып-ҡотороноп ҡосаҡланы ла, ҡыуанысынан битенә йәйелгән күҙ йәштәрен һыпырғылай-һыпырғылай, әйтте:

— Бер мең туғыҙ йөҙ илле алтынсы йылдың ун дүртенсе июлендә СССР Верховный судының Хәрби коллегияһы атайымдың ил һәм совет халҡы алдында бер ниндәй ҙә ғәйебен тапмай, уны тулыһынса аҡлаған һәм СССР хәрби комиссары уны комбриг дәрәжәһенә кире ҡайтарған!..

— Атайыңды терелтеп булмауы ҡыҙғаныс, ҡыҙым...

— Борсолма, әсәкәйем, зинһар, борсолма! — тип әүрәтте Шәүрә әсәһен һәм уға ҡушылып үҙе лә иланы. — Башҡорт халҡы бар саҡта, атайым да мәңге, мәңге йәшәйәсәк! Уны данлап, шағирҙар поэма, яҙыусылар роман яҙасаҡ, скульпторҙар һәйкәл ҡуясаҡ!..

...Шәүрә ҡыҙының һүҙҙәре хаҡ булды, башҡорт халҡының легендар улы комбриг Муса Лут улы Мортазиндың изге исеме һәм ҡылған эше — даны үҙ халҡына, һуңлап булһа ла, кире әйләнеп ҡайтты...

## Рәүеф Насиров. Уҙамандарҙы эҙләйем

...Башҡорт ғәскәрҙәре башында, алыҫ Польша сигендә аҡтар менән айҡашып, Совет Россияһы ҡоралының мәртәбәһен арттырып ҡайтҡандан һуң, аҙ ғына ял итеп алыу урынына, тағы атҡа менеп, тыуған яҡтарында тоҡанып киткән болаларҙың эсенә барып инеп, ҡоралы, унан да бигерәк кәңәштәре, өгөт-нәсихәте менән файҙалы өлөш индереп килгәс, Муса Мортазиндың абруйы республикала тағы күтәрелеп китте. Был осорҙа Стәрлелә унан да хөрмәтлерәк кеше булмағандыр, моғайын. Шуға күрә, һәр көн хәүеф янаған саҡта, Башҡортостан хәрби комиссариатына кем етәкселек итергә тейеш, тигән һорау тыуғас, иң алда Мусаны иҫкә алалар. Быныһы инде бәхәсһеҙ. Яу ҡырында бер мәртәбә лә баҙап ҡалмаған

кеше хәрби эштәрҙе ҡулына алырға тейеш. Унан да яуаплыраҡ вазифаны — Үҙәк Башҡарма комитет Председателе эшен башҡарырлыҡ кеше эҙләргә тура килгәс, йәнә Мортазиндың кандидатураһына туҡталалар. Һәр башҡортҡа хас сифаттары — хәйләләп йәшәмәүе, оҡшамағанды тура ярып әйтеүе, сетерекле мәлдәрҙә лә ҡурҡып-өркөп тормауын оҡшаталар уның, ғәҙел булыуын яраталар...

**Булатов, отставкалағы подполковник,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы.**
**Ҡомбриг Мортазин**
**(Совет Башҡортостаны. 1988, 10 ноябрь)**

...1918 йылдың мартында М.Мортазин Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советына (БВРС) индерелә. Бына ошо ваҡыттан алып Мортазин Зәки Вәлидов һәм уның тирәһендәге «юлбашсылар» менән аралаша башлай... 1920 йылдың баштарында Вәлидов Мортазинды хатта үҙенең иң яҡын дуҫтарының береһе булыуы тураһында әйтә.

...Ҡаһарман яугирҙың ғүмере һуғыш уты эсендә генә үтмәгән. Ул нескә күңелле кеше, бала йәнле ата, ҡатынының тоғро ире була. Ғәзим Шафиҡов яҙыуынса, Муса Лут улының ҡыҙы, билдәле режиссер, Станиславский исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Шәүрә Мортазинаның иҫтәлектәренә ҡарағанда, уның атаһы йыр-моңдо бик ныҡ ярата, бигерәк тә халыҡ йырҙарын әҫәрләнеп тыңлай, үҙе лә матур итеп йырлай. Ҡурай моңдарына ғүмер буйы ғашиҡ була. Мәскәүҙә йәшәгән сағында үҙ янына Башҡортостандан бына тигән ҡурайсыларҙы йыш ҡына саҡырып ала. Күп михнәттәр кисергән Украина ерендә булған саҡтарында украин йырҙарын ятларға ла өлгөрә. Китап уҡырға ваҡыты ҡалмауына йыш ҡына зарланып та алыр була. Ни эшләйһең бит, уға китап йәки ҡәләмдән бигерәк, йыш ҡына ҡулға ҡорал алырға тура килә.

Ә бына Әнисә Таһирова ниҙәр яҙа: «М.Мортазин ҙур хәрби эшмәкәр булыу менән бергә, бөтә күңеленән әҙәбиәтте һәм сәнғәтте ярата. Уның ҡатыны Фәтиха апай, рус һәм ғәрәп телдәрен яҡшы белеүсе, культуралы, белемле булыу менән бергә, һуңыраҡ М.Мортазин менән фронт юлдары буйлап йәнәш үтеүсе тоғро юлдаш та була. Башҡортостан артистары, ғөмүмән, сәнғәт кешеләре Мортазиндар йортонда бик йыш булалар. Шәүрә кескәйҙән үк Башҡортостандың һоҡланғыс тәбиғәтенә, ғорур тауҙарына, моңло күңелле ҡаһарман кешеләренә ғашиҡ булып үҫә. Кем белә, бәлки, оло мөхәббәт уның йөрәгендә илаһи матурлыҡҡа ҡарата изге ут ҡабыҙғандыр ҙа инде...»

— Кескәйҙән үк мин сәнғәткә һәм ҡаһарманлыҡҡа ғашиҡ инем, — ти Шәүрә Мортазина. — Хәтеремдә, «Чапаев» фильмы миңә бик ныҡ тәьҫир итте. Һәм беҙ йыш ҡына атайым менән ошо фильмдың геройҙары булып уйнай торғайныҡ. Атайым Фурманов, ә мин уның оло папахаһын кейеп алам да, мөмкин тиклем батырыраҡ күренергә тырышып, Чапаев булып уйнай торғайным...

...Дәүләт эшмәкәре булараҡ, М.Л.Мортазин 1921 йылдың апрелендә Мәскәүҙә булып, унда Үҙәк хөкүмәт алдында үҙе аңлағанса күп кенә проблемалар күтәрә. Унан ҡайтҡас, «Башҡортостан хәбәрҙәре» газетаһы хәбәрсеһе М.Л.Мортазин менән осраша һәм уның Үҙәктә башҡарған эштәре тураһында һораша. «Башҡортостандағы хәрби мәсьәләләр хаҡында иптәш Склянскийға бирелгән ҙур доклад һуңында ҡарар ҡабул ителде», — тип яҙа Мортазин...

## Г.Х.Казаккулов. Ушедший в бессмертие

...В 1978 году Башкирское книжное издательство выпустило учебное пособие по истории Башкирской АССР. В главе «Башкирия в Гражданскую войну» целый абзац посвящен одной национальной воинской части без упоминания ее командира. «Глубокой осенью 1919 года, — говорится в нем, — в степях северного Казахстана вела бои с белоказаками Башкирская кавалерийская бригада. Весной следующего года она уже далеко на западе и лихо дерется с белоказаками. Здесь она действует в основном по тылам противника. Башкирская конница была неуязвима своей подвижностью. Она совершала неожиданные и смелые нападения, наводя ужас на врага. Командование советских войск высоко оценило неустрашимость и героизм башкирских конников. Более 40 воинов (по другим данным — более 80-ти. — ***Г.К.***) бригады были награждены боевыми орденами Красного Знамени».

Этой бригадой командовал Муса Муртазин, он за личную выдающуюся стойкость и доблесть, за умелое руководство боем удостоен высокой награды Родины дважды.

Народы Башкирии и братской Украины сохранили в сердцах память о Мусе Лутовиче Муртазине, имя его произносят с любовью, уважением и гордостью. В городе Ровно Украинской ССР краеведческий музей экспонирует богатый материал о Башкирской кавалерийской бригаде и ее командире. М.Л.Муртазин провел более двадцати боевых операций на фронтах гражданской войны и ни одну не проиграл!..

## А.Лизюков. К 100-летию национального героя. Комбриг Муртазин (Советская Башкирия. 1991 г.)

...Муса Муртазин был наделен определенным литературным даром. В конце 20-х годов вышла его повесть «В освобожденной Башкирии», а затем крупная работа «Башкирия и башкирские войска в Гражданскую войну», которая была долгое время под строжайшим запретом и, по существу, хранилась в спецхране в единственном экземпляре.

В 1990 году книга эта была опубликована в журнале «Агидель».

О М.Муртазине сохранилось мало материалов или мемуарных воспоминаний. Если даже они существовали, то были уничтожены после расстрела полководца в 1937 году. Вот почему очерк Владимира Лизюкова, опубликованный в одном из военных журналов в начале 30-х годов, в этом смысле представляет огромную ценность. Лизюков сражался на том же Польском фронте, что и Муртазин. Судьба не раз сводила их вместе, так что русскому боевому коллеге посчастливилось видеть Муртазина и его знаменитую бригаду в деле не один раз. Он пишет о башкирском полководце с огромным уважением и любовью, восхищается его военным талантом. Именно Лизюков попросил Муртазина собственноручно написать автобиографию, что тот и исполнил. Это — наиболее полная такая автобиография полководца.

Очерк занимает немного места, но он стоит многого. В годы Великой Отечественной войны В.Лизюков был командиром дивизии, дослужился до генерала. Награжден многими орденами и медалями страны.

«...Вечером, когда стихла орудийная канонада и мы готовились к новому рассвету и новым боям, я пошел пожать руку комбригу Муртазину. Его бригада расположилась на ночевках у самого берега Днепра, в садах деревни Свободы.

Комбриг Муртазин был тоже башкир. Смуглое лицо, черные волосы, черные глаза... Серебряная кавказская шашка, подаренная ему за храбрость в борьбе с

колчаковскими отрядами в бытность его на Восточном фронте, большой маузер, бинокль и полевая сумка, пристегнутая к плечевому ремню, подчеркивали еще больше его решительность.

— Кто вы, откуда и по какому делу? — задал он мне вопрос.

— Товарищ комбриг, я командир Н-ского отряда, — отрапортовал я скороговоркой.

— Кстати, — ответил он, перебивая меня, — очень кстати.

Он быстро развернул свою полевую сумку, вынул из нее свежевскрытый пакет и дал мне.

Это было приказание штаба армии кавалерийской бригаде Муртазина совместно с нашим отрядом на завтрашний день преодолеть реку Днепр. Наш отряд передавался в подчинение башкирской кавалерийской бригады...»

### Газим Шафиков. «Батыры такие Отчизне нужны» (баллада) (Советская Башкирия. 1991 г.)

На следующем стыке
Европы и Азии
Весь «шитый не лыком»
Возник ты, Муртазин.
Во дни роковые.
Вбил саблю в ножны...
Батыры такие
Отчизне нужны!..

...Батыров убили
В тот горестный год,
Потом убивали
И память о них.
И все же Муртазин
Остался в живых!

Возносишь ты снова
Всем бедам назло
И саблю, и слово,
Свое начало...
...Дай руку и снова
Скачи впереди.
Чтоб саблей и словом
Торить им пути!...

### Александр Лизюков. Совет Ватанын яҡлап... (Совет Башҡортостаны. 1989, 9 июль)

...Аҙаҡтан мин комбриг Мортазинды һуғыш тамамланғанға тиклем күрә алманым, үҙенең башҡорттары менән күп еңеүҙәр яулағанын һәм тиҫтәләрсә батырлыҡтар күрһәткәнен генә ишеттем.

Мин уны һуңғы тапҡыр 1924 йылда Мәскәүҙә, вокзалда осраттым. Һуғыш бөткәндән һуң ул бер нисә йыл тыуған Башҡортостанында йәшәгәнен, төрлө вазифаларҙа эшләгәнен, әле хәрби академияға уҡырға килгәнен һөйләп торҙо. «Практиканы теоретик нигеҙгә һалырға уйлайым», — тип шаярҙы ул...

**Сулпан Ғәлина. Исеме халыҡ хәтерендә**
**(М.Мортазиндың тыуыуына 115 йыл)**
**(Яйыҡ. 2006, 14 декабрь)**

...Башҡортостандың ҡаһарман улдары һәм ғәскәр башлыҡтары — данлыҡлы Алдар батыр Иҫәнгилдин, Ҡараһаҡал, Салауат Юлаев, Ҡаһым түрә һымаҡ легендар шәхестәребеҙҙең береһе, атаҡлы полководец, Граждандар һуғышы геройы, күренекле дәүләт эшмәкәре Муса Мортазиндың исеме башҡорт халҡының йөрәгендә ысын-ысындан мәңгелек урын алған.

Уның ғүмер юлы — халыҡ бәхете өсөн көрәш һәм халыҡ мәнфәғәтенә тоғролоҡ өлгөһө, милләтебеҙҙең XX быуат тарихында уны, еңелеү белмәҫ халыҡ полководецын, яңы дәүерҙең Салауаты тип атарға хаҡлыбыҙ.

«...Минең бөтөн тормошом ауыр, батрак һәм ҡара эшсе булып үтте. Мин ялсы инем, урман ҡырҡтым, шахталарҙа эшләнем», — тип яҙа ул 1930 йылдың 13 авгусында «Красная Звезда» гәзитендә.

...1935 йылдың 2 декабрендә легендар командир М.Л.Мортазинға комбриг дәрәжәһе бирелә.

...1924—1927 йылдарҙа Эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының М.В.Фрунзе исемендәге Хәрби академияһында уҡый.

...Учалы ҡалаһында уның исемен йөрөткән урам бар, район-ҡала хакимиәте тарафынан М.Мортазин исемендәге премия булдырылған. Баймаҡ районының Темәс ауылында ул йәшәп киткән йортҡа таҡтаташ ҡуйылған. 1991 йылдың октябрендә тыуған ауылы Ҡөсөктә (Маяҡ – ***Р.Ш.***) йорт-музей асылды.

Бөйөк баһадирыбыҙҙың яҡты исеме, Башҡортостан автономияһы, башҡорт халҡы хаҡына, ниһайәт, шул уҡ Рәсәй иленең именлеге өсөн күрһәткән тиңһеҙ батырлыҡтары хаҡына иҫтәлек булып, М.Мортазин илебеҙ тарихында, милләтебеҙ хәтерендә мәңгелек урын алды.

**Рәүеф Насиров. Муса батыр**
**(Совет Башҡортостаны. 1990, 23, 24 октябрь)**

... — Ә Муса Мортазинға нисек ҡарай ине Манатов? — тип һораным мин унан (Ш.Манатовтың ҡатыны Ғәйшә Сәйәховнанан. — ***Р.Ш.***).

— Шәрифтең Мусаға йоғонтоһо ифрат ҙур ине, — тине Ғәйшә Сәйәховна. — Муса уның кәңәшенә ҡолаҡ һалғандыр, тип уйлайым. Сөнки Мортазиндың аҡтарҙа йөрөгәндә әйткән һүҙен беләм. «Әгәр Манатовтың ҡултамғаһын килтерһәгеҙ, мин шунда уҡ ҡыҙылдар яғына сығам», — тигән ул. Тимәк Совет власы яғына ышанған...

«...Мин, совет власының халҡыма азатлыҡ биреүенә ышанып, уның яғына сыҡтым...»

М.Мортазин (ҡултамғаһы)
1930 йылдың 17 авгусы.
Совет Башҡортостаны, 1991, 9 октябрь.

«...Революция еңә. Уның көстәре бөткөһөҙ. Инде иңгә ҡуйып, бөтәгеҙ ҙә бергә, еңеүгә!

...Башҡортостан ерендә революцияның өс йылы БССР хеҙмәтсәндәренә шуны күрһәтте: иҙелгән фәҡир милләттәргә азатлыҡты, Россия халыҡтарына

үҙбилдәләнеште тик Совет власы ғына бирә ала. Башҡа бер власть та уны бирмәҫ... Шулай итеп, рус һәм башҡорт иптәштәр, дошманлашыуығыҙҙы, милләт-ара яратмаусанлыҡты онотоғоҙ һәм берҙәм эшкә тотоноғоҙ, Совет власын нығытығыҙ, милли дошманлыҡ таратыусылар менән аяуһыҙ көрәшегеҙ... Барлыҡ намыҫлы граждандар берҙәм эшләгәндә генә БССР граждандары яҡты киләсәккә — коммунизмға атлаясаҡ. Йәшәһен БССР хеҙмәтсәндәренең һәм бөтә федерацияларҙың берҙәмлеге!

Милли ыҙғыштар — долой!

Бер милләттең икенсеһенән өҫтөн булыуы, иҙеүе, ҡол итеүе — долой!

Йәшәһен III Коминтерн!

Советтарҙың бөтә Башҡорт Үҙәк Башҡарма Комитеты Председателе М.Мортазин.

РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты политсекретары Бейешев.

БССР Совнаркомы Председателе М.Халиҡов.»

## Фәнүзә Нәҙершина архивынан. «Башҡорт сигенә белмәй» (Совет Башҡортостаны. 1991, 19 октябрь)

...Төбәктең фольклоры, Аҡмулла шиғырҙары тураһында мин заманында яҙып сыҡҡайным, ә бына Муса Мортазинға ҡағылышлы иҫтәлектәр архив кәштәһендә ятып торҙо...

Данлыҡлы комбригтың юбилей көндәрендә Курган аҡһаҡалдарының хәтирәләрен уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итеүҙе кәрәкле тип таптым.

Хәлимов Солтан Хәлим улының һөйләгәне (1889 йылғы. Бәйғәнә ауылы):

— Муса Мортазинды иң тәүҙә 1919 йылдың ноябрендә күрҙем. Уға саҡлы беҙ Ырымбурҙа инек, Мортазиндың часы — Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы. Ҡарғалыла тора ине. Беҙ уның часына 21 ноябрҙә барып ҡушылдыҡ. Шунда беҙ 1920 йылдың 20 майына тиклем торҙоҡ. 20 майҙа Польша фронтына, Киев йүнәлешендә киттек.

«...Беҙ, башҡорт ҡаһармандары, бер ҡасан да сигенмәҫкә тейеш, әйҙәгеҙ алға, башҡорт балдары (балалары. — ***Ф.Н.***) һуғыштан ҡурҡмай ул», — тине.

Муса бик ҡаһарман кеше ине. Бер ҡасан да артҡа сигенеү яғында булманы, һуғышҡа бик шәп ине...

...Аҙаҡ Магнитогорскиға килеп, үҙенең часында булған һалдаттарға партизан билеты биреп киткән. Был билет бик абруйлы ине...

## Камалов Мәһәҙи Камалетдин улының һөйләгәне (1900 йылғы, «Ҡатайсы» совхозынан)

—...Пулемет командаһына яҙылдыҡ. 1920 йылдың 7 апрелендә һуғышҡа киттек. Воронеж станцияһында таң алдынан бандиттар ата башланы. Ромашка тигән ауылда меңләгән һалдаты булған банда торған. Беҙ шуны ҡыйраттыҡ. Команда һүтте генә дошманды. Башҡорт шәп һуғышты. Муса Мортазин шикелле батыр кешеләр бик күп түгел ул. «Һыртҡа китмә, тырнағың-тешең менән йәбешеп булһа ла, алға бар», — ти торғайны... Күңелсәк кеше ине. Һин уларҙың йырлағанын ишетһәң ине! Ҡурҡыу белмәне. Уҡыуы ла ҙур ине...

## Муса Мортазин тураһында замандаштары
## (Совет Башҡортостаны. 1991, 9 октябрь)

...Полк командиры унтер-офицер Муса Мортазин минең иң яҡын дуҫым, 1917—1918 йылдарҙың ҡышында Мәскәүҙә Татар-башҡорт комиссариатында эшләгән. Верхнеуральск өйәҙендә Башҡорт ҡыҙыл батальонын ойоштороп маташҡан...

...Верхнеуральск өйәҙендә комиссар булараҡ, контрреволюционерҙарҙы, улар яҡлыларҙы күпләп ҡулға алды, шул арҡала дошмандары күбәйҙе һәм Дутов ваҡытында эҙәрләнеүгә эләкте. Ә инде «Учредилка» бөтөрөлгәс, ул Советтар яғына сығыуҙы тиҙләтеүселәрҙең береһе булды һәм үҙ һалдаттарын да шуға әҙерләне...

Зәки Вәлиди.

## М.Л.Мортазин. Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында

...Октябрь башында Ҡаҙаҡкол тирәһендә 80 кешелек шайка тынғы бирмәй башланы. Реакцион Сәғит мулла Советтарға ҡаршы ҡотҡо таратып ятты. Совет отряды был шайканы Оҙонғол-Оскүл-Мораҡай ауылдарында эҙәрләне. Мораҡайҙағы бәләкәй генә бәрелеш ваҡытында ҡыҙылармеец Ғ.Хаҡбирҙин бандиттар ҡулына төштө. Бандиттар уны шунда уҡ атҡан. Был ваҡиға отрядҡа бик нығ тәьҫир итте һәм ул бандиттар шайкаһын көньяҡҡа тиклем ал-ял бирмәй эҙәрләне.

25 октябрь Айыуһаҙ ауылы эргәһендә отрядҡа Ломовка ауылынан бер пулемет менән Г.Масляев отряды килеп ҡушылды (15 рус). 26 октябргә ҡаршы төндә отряд Зәйнуллин-Хажиәхмәт Унасов бандалары торған Юламан ауылына һөжүм итте. Шайка ауылды ташлап ҡасты, ләкин иртәгәһенә ҡабат ябырылды. Һуғышта башҡорт совет отряды 100 кеше һәм 25 ат алды.

26-һында һуғыш Смелый ауылы эргәһендә лә булды. Мең ярым самаһы кеше туплаған дошман (шуның 500-ләбе ҡоралллы ине) иртә менән совет отряды торған Айыуһаҙ һәм Смелый ауылдарына һөжүм итте. Смелый ауылында Плашкин иптәштең 50 кешелек пехота отряды бар ине. Отряд атакаға килеүсе дошмандың аттарын тиҙерәк арытыу өсөн банданы һөргән ерҙә һуғышырға мәжбүр итте. Плашкиндың иҫәбе дөрөҫкә сыҡты: дошмандың 200 һыбайлыһы, дүрт саҡырымлы фронт тотоп, уңайһыҙ шарттарҙа һуғышырға мәжбүр булды. Плашкин отряды үҙенең һул флангыһының хәүефһеҙлеген тәьмин итте. Мортазин отрядының һыбайлы төркөмө иһә дошмандың һул флангыһына атака яһаны һәм йөҙҙән ашыу кешеһен әсиргә алды, ҡалғандары Күсем һәм Салауат ауылдарына сигенде. Шайка Күсем ауылында тулыһынса туҙҙырылды һәм тарҡалды. Баш күтәргән башҡорттарҙың ҙур өлөшө совет отряды яғына сыҡты, восстание башлыҡтары ҡасып ҡотолдо.

...1920 йылдың 26 декабрендә Башревком вәкилдәре Мостовенко, Ҡарамышев, Гәрәй Иҙелғужиндар менән баш күтәреүселәр етәксеһе Мырҙабулатов, Сәфәрғәлиндар араһында рәсми килешеү төҙөлдө. Ошоноң менән восстание туҡтатылды, баш күтәреүселәрҙең вәкилдәре Стәрлетамаҡ ҡалаһына ҡайтты һәм совет төҙөлөшөндә эшкә тотондо...

**Мәүлит Ямалетдинов. Аҫыл ир Мортазин**
**(Башҡортостан. 1991, 29 ғинуар)**

...Мин бәләкәйҙән Муса Мортазин хаҡындағы легендалар, уның тураһындағы ҡапма-ҡаршылыҡлы хәбәрҙәр ишетеп үҫтем. Берәүҙәр уны күккә күтәреп, эпос батырҙарына хас һыҙаттар менән ҡылыҡһырлаһа, икенселәр әллә аңһыҙ рәүештә ике генә һүҙ менән шундай баһа бирә ине: «халыҡ дошманы». Дөрөҫөрәге, «враг народа» тигәндәрен йышыраҡ ишетергә тура килде... Муса Мортазин тураһында китап яҙырға ниәтләнгәс, геройҙың тормош юлына, хәрби биографияһына ҡағылышлы рәсми материалдар туплау менән бер рәттән, уны күреп, ишетеп белгән кешеләрҙе осратып һөйләшеү өсөн бик күп йөрөргә тура килде. Ошо күп һанлы сәйәхәттәр ваҡытында мин шуға инандым: халыҡ күңеле изге, бөйөк, һәм бер ниндәй репрессия ла, бер ниндәй тыйыуҙар ҙа уны яҡшыны ямандан, изгелекте яуызлыҡтан айыра белеү һәләтлегенән мәхрүм итә алмай.

**Газим Шафиков. И боль, и надежда**
**(Об откликах на очерк «Для ратных дел рожденный»)**
**(Ленинец. 1988, 28 января)**

«...Одно вызывает сомнение: нет уже тех боевых ветеранов. Если бы исторический материал «Для ратных дел рожденный» был напечатан лет 15—20 назад, как они были бы рады, сколько могли бы рассказать о своем командире, о жестоких сражениях по защите Советского государства в Гражданскую войну. Диву даешься, что имя такого человека преднамеренно замалчивалось все эти годы...»

Так заканчивает свое письмо Мустафа Султанов, директор Кумертауского музея боевой и трудовой славы, председатель Городского совета ветеранов.

...Скажу откровенно: я не удивился этим откликам, ибо хорошо знал, что вопрос о Мусе Муртазине и его соратниках давно жил в людях как неизбывная боль и постоянное ожидание.

...М.Султанов подробно описывает то, что когда-то слышал о Муртазине и муртазинцах. Особенно интересны описания личности Мусы Лутовича, его поведения в бою, когда он был на острие атак, в гуще бойцов, одним из первых врывался в ряды врагов, увлекая за собой остальных. Бойцы говорили про него: «Нашего командира хранят крылья ангела!»

...Любопытные факты об ошибках М.Муртазина на первом этапе приводит уроженец села Макарово Ишимбайского района Г.С.Карамышев. Он рассказывает о членах Первого Макаровского совета, большинство из которых являлись ставленниками и близкими родственниками буржуазных националистов, которые примыкали к казачьему атаману Дутову, в частности, ротмистр Амир Карамышев. «Именно его тяжкие грехи, — пишет Г.С.Карамышев, — отразились на других, прежде всего на Мусе Муртазине». Конечно, все эти непростые вопросы должны быть исследователями до конца выяснены и уточнены.

**Рәшит Солтангәрәев. Осто бөркөт (повестан өҙөк)**

...Муса Мортазинды йыш ҡына әҙәби персонаж — Шолоховтың «Тымыҡ Дон»ындағы Григорий Мелехов менән сағыштыралар. Ысынлап та, бер ҡарағанда, оҡшашлыҡ бар. Әйтәйек, улар икеһе лә крәҫтиәндән сыҡҡан

кешеләр, герман һуғышынан офицер булып ҡайталар, Октябрь революцияһын ихластан ҡабул итеп, Совет власы урынлаштырырға тотоналар. Шунан инде, аҡтар яғына күскәс, командир булып китәләр. Ҡайһы бер эпизодтарына тиклем тап килеп ҡуя: аҡтарға күскәс, Григорий Мелехов буйһонорға теләмәйенсә, генерал Фицхалауровҡа штабта ҡылысы менән янай, ә Муса Мортазин генерал Эллерс-Усовты штабында атып яралай. Былар, әлбиттә, тышҡы оҡшашлыҡ. Унан һуң, ни тиһәң дә, Мелехов, прототибы булһа ла, әҙәби персонаж, ә Мортазин — ысынбарлыҡтағы шәхес. Төп уртаҡлыҡ шунда: улар икеһе лә илдәге, йәмғиәттәге оло һынылыштарҙы, заман фажиғәһен кисерә. Айырма шунда: Дон казактары — социаль фажиғә, ә Муса Мортазин һәм башҡорттар милли фажиғә кисерә. Ҡайһыһы хәтәрерәк?

Мин үҙемде ошо Муса Мортазиндар алдында ниңәлер ғәйепле һымаҡ тоям. Улар беҙҙең өсөн йәнен фиҙа ҡылды, ә беҙ нисек йәшәп ятабыҙ? Мортазин тураһында берәй әҫәр яҙырға тигән ниәт күптән бар ине. Әммә, берҙән, материалдар йоҙаҡ эсендә ятһа, икенсенән, был хәрби эшмәкәр күптән тулыһынса реабилитация алһа ла, уның тураһында һөйләү ҙә, яҙыу ҙа ошо көндәргәсә тыйылып торҙо. «Ағиҙел» журналында Муса Мортазиндың иҫтәлектәрен баҫтырып сығарыу минең өсөн ана шул көтөлгән материал булды ла инде. Шуларҙы файҙаланып, «Осто бөркөт» тигән повесть яҙҙым. Әҫәр ҙур түгел, Муса Мортазиндың тәүәккәл, ҡаһарман характерын, ватансы рухын ғына күрһәтергә теләнем. Нисек килеп сыҡҡандыр, уныһын уҡыусы әйтер...

## Урал Ильясов, МВД хеҙмәткәре. Мортазин ҡалдыҡтары (Совет Башҡортостаны. 1990, 13 февраль)

...Бына уны ла яуап бирергә саҡырттылар. Коридорҙан барған саҡта ул ҡаршыға Ҡотой ауылы коммунисы Хажинды килтереүҙәрен күреп ҡалды. Ҡарт коммунист, уны инде ете тәүлек туҡмауҙарын әйтеп үтте...

Следователь бүлмәһенә йүнәлгән сираттағы был ҡорбан — Учалы районынан Мөхәммәт Ильясов ине. 1905 йылда тыуған. Тамыры борон башҡорт ғәскәрҙәрендә есаул булып хеҙмәт иткән Көсөк Мортазинға барып тоташа. Тимәк, ниндәйҙер кимәлдә Муса Мортазинға ла зат тура килә. Элек батрак, һуңынан — ҡыҙылармеец.

...Бер туған Ильясовтарҙың иң кескәйе — 19 йәшлек Мөхтәр НКВД район бүлеге хеҙмәткәре, 1937 йылдың сентябрендә отпускыла була. Бер көндө, Ҡалуй ауылына китеп барғанда, уны зыярат янында туҡтаталар ҙа, бер ни ҙә аңлатып тормайынса, Учалыға алып китәләр. Бер көн үткәс, Мөхәммәтте лә алалар... Көсөктән барлығы 12 кеше бик аҫтына алына...

## Ғәзим Шафиҡов. Мортазиндың һуңғы фотографияһы (Йәшлек. 1992, 16 ғинуар)

...Әйҙә, кемдәрҙер боронғо Византиянан килгән Христың йөҙө алдында табынһындар һәм, баштарын эйеп, ғибәҙәт ҡылһындар. Әйҙә, Ершалоимдан Иешуа Га-Ноцри барлығына ла ышанһындар. Миңә тәрегә ҡаҙаҡланып түгел, ә халҡының ҡанһыраған күкрәгендә язаланған башҡорт кешеһенең ошо ғазаплы йөҙөнә ҡарау ҙа етә. Ярты сәғәттән атып үлтереләсәк кешегә фотоаппаратын йүнәлтергә кем баҙнат итте икән?

Ни эшләргә, уға рәхмәт әйтергәме, әллә был оятһыҙ һәм ҡаты бәғерле ҡылығы өсөн ҡарғарғамы? Нисек кенә булмаһын, уның ошо йән тетрәткес ҡараштьы һынландырып ҡалдыра алыуына ғәжәпләнергә генә ҡала. Үлем билдәһеҙлегенә текәлгән был күҙҙәрҙе тасуирлау мөмкин түгел — уларҙы күрергә кәрәк. Миңә бер ҡасан да былдай сикһеҙ һағыштың, ғәҙәттән тыш әрнеүҙең шаһиты булырға тура килгәне юҡ ине. Был әрнеү башҡорт юлбашсыларының колонизаторҙар дусар иткән тамуҡ әрнеүҙәренә тиң. Хатта бер ҡабырғаһы менән ырғаҡҡа эләктерелгән Алдарҙың күҙҙәре лә былдай хәсрәткә тулмағандыр.

Мортазиндың күҙҙәрендә тән яраһы ғына түгел, ә большевиктарҙың юлбашсылары тарафынан атҡарылған мыҫҡыллау һәм уның кеүек меңдәр көрәшкән идеяны иҙгән, тапаған кешеләрҙең хыянаты ла сағыла. Уның күҙҙәрендә «Рәсәйгә ирекле ҡушылыу»ҙан һуңғы дүрт быуат эсендә инде нисәнсе тапҡыр юғары баҫҡыстағыларҙан, был юлы большевиктарҙан алданған һәм яңынан ҡоллоҡтоң утлы йәһәннәменә ырғытылған халҡы өсөн кисереп бөткөһөҙ ҡайғы. Шуның өсөн көрәштеме ни Муса?!

Эйе. Саллана башлаған шырт баҫҡан йөҙ бер ҡасан онотолмаҫ. Был йөҙ бөтөнләй ҡатып ҡалған кеүек. Тик шулай күренә генә! Уның ҡымтылған ирендәрен ҡыпһыуыр менән дә аса алмаҫһың. Маңлайына ҡан һауған, сикәнән эйәгенә табан яра эҙе төшкән. Бөтәһе лә күҙҙәргә яҙылған тән яраһының һыҙлауы һәм күңелдең, аҡылдың аңлатып булмаҫлыҡ көсөргәнеше хаҡында һөйләй.

Муса Лутовичтың был мәлдә нимәләр кисереүен фаразлап ҡына була. Моғайын, уның күңеле аша ла үҙен бөтә тормош буйына оҙатып барған революция уҙғандыр. Ул революция өсөн Муса әҙ ҡан ҡойманы. Хәҙер уның нимәгә килтергәнен аңланы. Мортазин, моғайын, үҙендә бөтә ғүмерен бағышлаған идеяны яндырғандыр... Революция үҙенең тамуҡ утында үҙе дөрләгәндер. Һуңғы ҡабат. Был ут беҙҙең йөрәктәрҙе лә көйҙөрә.

Бына нимә хаҡында асынып ҡысҡыра Полководецтың күҙҙәре...

## Газим Шафиков. Воин, Полководец, Гражданин, Патриот (к 100-летию со дня рождения М.Л.Муртазина) («Октябрьское знамя». 1991, 24 октября)

...Что хотелось бы выделить прежде всего в характере Муртазина? По-моему, лучше других ответит на этот вопрос он сам. «Мой отец Лут Муртазин был, может быть, самым бедным человеком в ауле. Но он не хотел отдавать нас, своих сыновей в работники, не хотел унижаться перед богатыми родственниками. Он был человеком гордым и суровым, и они за это его убили. Он и нас вырастил суровыми и гордыми людьми».

Прибавьте к этому долгие вечерние рассказы бабушки, «жены видного предводителя башкирского восстания» о батырах прошлого, о борьбе народа против царских поработителей, рассказы, которые будили в подростке гнев и желание служить своему народу — мученику и воителю...

Прибавьте крепкую стать, громадную физическую силу и четырехлетний фронтовой опыт, и перед вами вырисуется портрет народного вождя, прямого наследника большой когорты башкирских мятежных вождей прошлых веков...

## Роман Алферов. Муса Муртазин — человек сложной судьбы (Ленинец. 1991, 21 мая)

...Муса Лутфуллович Муртазин... Да и сейчас все еще слышатся среди старожилов Узяна, Каги и Авзяна нелестные разговоры об этом человеке сложной и нелегкой судьбы.

Узянцы личность Муртазина увязывают с воспоминаниями о трагических днях пребывания летом 1919 года башкирских конников в тогдашнем Тамъян-Катайском кантоне. «Муртазинцы», говорят они, чинили погромы в русских селениях, грабили жителей и т.д. После этого между Узяном и Кагой несколько лет стоял деревянный памятник с надписью: «Жертвам Муртазина» Было? К великому огорчению, было. Но почему такое случилось? — вот вопрос, в котором, наконец, надо разобраться. А то ведь старших слушают младшие, вплоть до внуков и правнуков.

А теперь, давайте, возвратимся к трагическому «узянскому эпизоду» лета 1919 года, когда «муртазинцы бесчинствовали в русских населенных пунктах...» Эта была месть за то, что чинили над башкирским населением отдельные русские личности в ту ненастную и тревожную пору гражданской войны. И как бы ни желал Муса Муртазин обуздать тогда своих конников-башкир, он был бессилен сделать это. Он остался бы «генералом без войска», а то бы поплатился и собственной жизнью...

## Газим Шафиков. Последний из народных вождей (к 100-летию со дня рождения М.Л.Муртазина) (Советская Башкирия. 1991, 9 октября)

...Уже четыре года минуло с тех пор, как я начитывал в Башрадио на магнитофонную ленту свой первый очерк о Мусе Муртазине, и голос мой подрагивал от некоторого волнения, ибо имя это продолжало оставаться запретным, несмотря на то, что шел третий год перестройки. Уже писали в сочувственных тонах о белых генералах, о большевистском терроре, оплакивали трагическую гибель царской семьи... А о кавалере двух орденов Красного Знамени (теперь стало ясно, что — трех!), обладателе именного серебряного оружия и золотых часов, преподнесенных Советским правительством, выдающемся военачальнике гражданской войны по-прежнему нельзя было говорить. И где? На его родине! Тогда как в Москве портрет комбрига спокойно висел в фойе Военной академии им.Фрунзе, где Муртазин учился в 20-е годы, а виднейшие военные деятели с теплотой упоминали его имя в своих мемуарах.

Потом очерк о Муртазине появился в газете «Ленинец», журнале «Агидель», вошел в сборник «И совесть, и жертвы эпохи», который увидел свет в этом году. И с каждым разом сведений о Мусе Муртазине становилось все больше, вышли из подвалов разных московских и местных архивов засекреченные документы, мертвым грузом лежавшие там с 1937 года, когда он стал жертвой сталинских репрессий в числе других военачальников...

## С.Халфин, заместитель директора по науке Института истории, языка и литературы. БНЦ УрО АН СССР Комбриг Муса (Вечерняя Уфа. 1991, 11 октября)

...В Институте истории, языка и литературы БНЦ УрО АН СССР сегодня открылась научная конференция, посвященная 100-летию выдающегося полководца гражданской войны М.Л.Муртазина. Ее организаторами, кроме института, также являются Союз писателей Башкортостана и Центральный государственный архив БССР...

## Гали Қамалов. В кавалерийской бригаде Мусы Муртазина (из книги «За власть Советов» под редакцией Х.С.Сайранова, В.П.Черемиса, Б.Х.Юлдашбаева) (Башкирское книжное издательство. Уфа. 1961)

...10 ноября началось общее наступление на Петлюру, первыми в село Қлынено ворвались 27-й и 1-й полки нашей бригады. Бой был недолгий, но жестокий. Много было зарубленных петлюровцев. Так называемая Запорожская дивизия полегла здесь почти полностью, начальник штаба, не успев сбежать, застрелился прямо в тачанке. В его личном багаже мы нашли железный сундучок, в котором оказались золотые кресты и деньги, причем денежные знаки были почти всех стран...

## Х.Ҡушаев. БашЦИҠ рәйесе М.Л.Мортазин (Яйыҡ. 1993, 12 август)

...Аҡтарҙың ҡалдыҡтарын ҡырғыҙ далаларына ҡыуып, комбриг үҙ бригадаһын Урал фронтына алып ҡайтты. Бындағы пехотабыҙ Урал казактары бандаһын кавалерия ярҙамынан тыш тар-мар итерлек хәлдә түгел ине. Мортазин иптәш бригадаһы менән бында ла пролетариатҡа баһалап бөткөһөҙ ярҙам күрһәтте... казактарҙың 3, 8, 15-се полктарын һәм байтаҡ партизан отрядтарын бер-бер артлы ҡыйратты...

## Р.Мәрҙәмшин. Имам-хатип булырлыҡ (Башҡортостан. 1992, 11 март)

...Башҡорт халҡының данлыҡлы улы Муса Мортазиндың музейына тағы бер ҡомартҡы өҫтәлде. Ул Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Күбәләк-Тиләү волосының Көсөк ауылы башҡорто Мортазин Муса Лут улына Мосолмандарҙың Ырымбур руханиҙар йыйылышы (Оренбургское духовное собрание мусульман) тарафынан бирелгән танытма. Унда яҙылған һүҙҙәргә ҡарағанда, 25 йәшлек Муса Мортазин 1916 йылда «Мөхәммәт дине ҡағиҙәләрен белеүенә унан имтихан алыуҙарын» һорап мөрәжәғәт итә.

Һынау уңышлы үтә. Мортазинды «имам-хатип һәм мөғәллим булырға һәләтле» итеп таныйҙар. Руханиҙар йыйылышы рәйесе, Ырымбур мөфтийе уға «губерна етәкселеге тарафынан дини дәрәжә бирелгәнгә тиклем дини йолаларҙы үткәреү хоҡуғын бирә...»

## Рамаҙан Өмөтбаев. Уянырға мөҙҙәт етте (Башҡортостан. 1991, 6 декабрь)

...1937 йылдың 8 декабрендәге сасҡау һыуыҡ таңында «Башҡортостан территорияһында Совет власын ҡолатыуҙы маҡсат итеп ҡуйған контрреволюцион башҡорт милли хәрәкәтенең» 25 ағзаһын, элекке мортазинсыларҙы Өфө төрмәһендә язалайҙар, ике-өс минут интервал менән сығарып аталар. Улар араһында элекке мәғариф халыҡ комиссары, Мәскәүҙә ҡыҙыл профессура институтын тамамлаған Ибраһим Хафиз улы Абызбаев, эске эштәр халыҡ комиссариатының атлы дивизион командиры, граждандар һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған Баймаҡ районы Ҡолсора ауылы егете Шәмсетдин Ғәфәров, медицина институтының хәрби етәксеһе полковник Рәүеф Сәфәров һ.б. була...

### Ғәзим Шафиҡов. Автономия төҙөү юлында
### (Зәки Вәлиди портретына һыҙаттар)
### (Башҡортостан. 1990, 1 ноябрь)

...Был тарихи шәхестең сәйәси портретын ул осорҙа ҡайнап торған ижтимағи ваҡиғаларҙан айырып ҡарау мөмкин түгел. Уны шулай уҡ үҙе аша атлап сығырға тырышҡан идеологик кәртәләрһеҙ ҙә күҙаллап булмай торғандыр... Беҙҙең идеологтар кеше исемен, уның яҡты иҫтәлеген бысратыу йәһәтенән оҫта булды, хәйер, тыңлаусан тарихсы, әҙәбиәтселәр ҙә уларҙан ҡалышманылар, Сталин осоро ла, унан һуңғы дәүер ҙә «халыҡ дошмандары» тип аталған кешеләр йөҙөндә шәхесте, кешене күрергә, уның уңыш һәм хаталарын аңларға теләмәнеләр.

Хәйер, ул ғынамы ни! Зәки Вәлидовтың исемен бысраҡҡа батырҙыңмы — 1918—1919 йылдарҙағы башҡорт милли хәрәкәте юҡҡа сыға, уның менән бергә уларҙың үҙ милләтенең дәрәжәһен аяҡҡа баҫтырырға, уның бөгөлгән арҡаһын төҙәтергә тырышыу ҙа. Муса Мортазиндың исемен ғәйбәткә күмдеңме — аҡ поляктарға ҡаршы һуғышта мөғжизәле батырлыҡтар күрһәтеп, үҙен данға сорнаған Башҡорт кавалерия бригадаһын юҡ тип иҫәплә. Эйе, ябай һуғышсынан алып политик комиссарҙарға, эскадрон командирҙарына тиклем мортазинсылар һуңынан Сталиндың рәхимһеҙ салғыһынан ҡырылғанға саҡлы, үҙ республикаһында күренекле сәйәси һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре Вәлидов менән Мортазинды юҡҡа сығарыу, уларҙы халыҡ хәтеренән юйыу тик бер маҡсат — тыуған халҡын хурлау өсөн эшләнде... «Ҡоҙғон»дар үҙ маҡсатына өлгәште лә...

### Ғәзим Шафиҡов. Һүҙем — халҡым хаҡында
### (Башҡортостан. 1990, 8, 9, 10 август)

Ерле халыҡтың үҙ республикаһында ҡыйырһытылыуына дәлилдәрҙе күп килтерергә мөмкин. Ләкин мин башҡорттар бер кемде лә алдына сығармаған икенсе бер нәмә тураһында һөйләмәксемен. Был үҙ төйәген ташлап, илдең башҡа яҡтарына киткәндәргә ҡағыла. Һуңғы мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, илен ташлап киткән башҡорттар һаны ярты миллионға етә.Сәбәбе? Ул үрҙә әйтелде инде — эшһеҙлек, фәҡирлек, торлаҡ, ҡалала прописка булмау... Башҡорт халҡының яҙмышына, мәҙәниәтенә, мәнфәғәттәренә, ғөмүмән, йәшәүенә ҡыҫылыуҙар, тупаҫ, яуыз, мәғәнәһеҙ тығылыуҙар 70 йылдан ашыу дауам итеп килә.

Быуаттар буйы бөйөк восстаниелар күтәргән, Рәсәй дәүләте сигендә казак хеҙмәте алып барған, Граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғышы яландарында ҡаһарманлыҡ өлгөләре күрһәткән халыҡ быңдай мөнәсәбәткә һис кенә лә лайыҡ түгел...